ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 март (буранай) 2019

№9 (843)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был ойошма уларҙы...**

тыуған яҡтар менән бәйләй



6-7

**Башҡорт Дездемонаһы**





7

**Тамырҙарын юллай...**

Себерҙәге сыбырҙар



8-9

**Ауылдың иң кәрәкле кешеһе**



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә март аҙағына тиклем 2019 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда яҙылыу бара. 615 һумға әле үк яҙылып ҡуйһағыҙ, отороһоғоҙ. Апрелдән хаҡтар бер аҙ юғарыраҡ буласаҡ. Ә 2019 йылдың тәүге яртыһы өсөн иһә 18 мартҡа тиклем яҙылһағыҙ (өс айға - 307 һум 50 тин), гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлаясаҡһығыҙ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Хеҙмәтләндереү өлкәһендә эшләүселәрҙең, шулай уҡ чиновниктарҙың тупаҫлығына йыш осрайһығыҙмы?*

***Гөлдәр МИРХӘЙҘӘРОВА, психолог, уҡытыусы:*** Көйһөҙ, тормоштан, башҡаларҙан ҡәнәғәт булмаған, асыулы, хатта агрессив кешеләр менән аҙым һайын тип әйтерлек осрашырға тура килә: өйҙә, эштә, урамда, табипҡа сиратта, магазинда, юлдарҙа, интернетта... Бындай хәлдә, йәғни тупаҫлыҡ ҡорбаны на әүерелгән осраҡта, һәр кем үҙ холоҡ үҙенсәлектәренән сығып, тәртип-ҡылыҡ моделен үҙе һайлай. Һайлай, тип әйтеү бик дөрөҫ тә булып етмәҫ, сөнки бындай осраҡтарҙа агрессия ла, уға яуап та үҙенән-үҙе, уйламаҫтан (спонтанно) килеп сыға ғәҙәттә. Әгәр һәр ике яҡта ла тупаҫлыҡ тигән нәмә өҫтөнлөк итә икән, эш ҙурға китеп, күңелһеҙ хәлдәр килеп сығыуы ла бар. Бөтәһе лә тип әйтерлек тупаҫлыҡтың ирекһеҙҙән "ҡорбанына" әүерелгән, ләкин үҙенең был хәле менән килешергә теләмәгән "партнер"ҙың аҡыл һәм кешелек сифаттарына, ихтыяр көсөнә бәйле. Ниндәй хәлдә лә төрлө көнкүреш конфликттарынан өҫтөн ҡалырға тырышырға, янъял ҡуптарыусыға тәүҙән үк ирек бирмәҫтән, тапҡыр, ғәҙел һүҙенде әйтә белергә лә кәрәк, ә инде агрессия алдында үҙенде яҡлауһыҙ, көсһөҙ тояһың икән, бындай хәлдән һаулығыңа, кәйефеңә мөмкин тиклем зыянһыҙ сығам, тиһәң, конфликттан "ҡасыу" юлын һайлайһың инде. Көнкүреш-урам тупаҫлыҡтарына беҙ өйрәнгәнбеҙ, уларҙың күбеһе аноним ҡала, шунлыҡтан тейешле язаһын да алмай, ә бына йыш ҡына етәксе урын биләп ултырған кешеләрҙең тупаҫлығына, ябай халыҡҡа өҫтән, һауалы ҡараш һәм тәкәбберлек күренештәренә осрарға тура килә. Бындай факттар иһә язаһыҙ ҡалырға тейеш түгел. Хәтерләһәгеҙ, былтыр Һарытау өлкәһе хеҙмәт министры Н.Соколова тигән ханым халыҡты 3 мең 500 һумға бер ай йәшәргә ҡушып, макарон ашап ултырһындар, әйҙә, тигән өсөн эшенән ҡыуылды, хатта ғәфү үтенеүе лә уны ҡотҡарманы. Ил президенты В.Путин юғары чиновниктар менән бер осрашыуында "кешеләргә ҡарата тупаҫ, оятһыҙ һәм кәмһетеүле мөнәсәбәттең" ил мәнфәғәтенә зыян килтереү ихтималлығы хаҡында иҫкәртте һәм чиновниктарҙы этика ҡанундарын һаҡларға саҡырҙы. Был йәһәттән Башҡортостан Башлығы вазифаһын башҡарыусы Р.Хәбиров та бик талапсан һәм үҙ ҡарашын белдереп кенә тора. Сибай ҡалаһындағы хәлдәргә ҡағылышлы, мәҫәлән, кешеләр менән эшләгәндә "тупаҫлыҡ, һауалы, эре ҡараштa булыу" осраҡтарына кисекмәҫтән сик ҡуйыу кәрәклеге хаҡында киҫәтте: "Һеҙ бик етди бер хата ҡылдығыҙ. Граждандарҙы кәмһетергә бер кемдең дә хаҡы юҡ. Әгәр һеҙ дәүләт һәм муниципалитет хеҙмәткәре мундиры кейгән икәнһегеҙ, бер ниндәй хәлдәрҙә лә: хаҡлымы ул кеше, әллә юҡмы, уның ниндәйҙер әхлаҡи сифаттарына ҡарамаҫтан, уны кәмһетергә ярамай", - тип ҡәтғи белдерҙе һәм әлеге чиновник өсөн үҙе ғәфү үтенеп, етәксе вазафаһындағыларға онотолғоһоҙ һабаҡ бирҙе.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИҒТИБАР!

# БӨТӨН ДОНЪЯ БАШҠОРТТАРЫ...

**Өфөгә йыйыла**

**2019 йылдың июнендә Өфөлә V Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы уҙа. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тейешле Указға ҡул ҡуйҙы.**

Документ милләт-ара тыныслыҡты һәм татыулыҡты нығытыуға, башҡорт халҡының рухи мәҙәниәтен һаҡлауға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеү, республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙгә ярҙам күрһәтеү маҡсатын күҙ уңында тота. Йыйынды ойоштороу башланғысы менән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты сығыш яһаны. Указ менән конгресҡа әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты составы раҫланды. Ойоштороу комитетына Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һәм "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы менән бергә 2019 йылдың 1 апреленә тиклем Рәсәй Федерацияһы субъекттарында саралар үткәреүҙе иҫәпкә алып, ошо ваҡиғаға әҙерлек планын төҙөү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелде. Республика Хөкүмәтенә Указды тормошҡа ашырыу менән бәйле сығымдарҙы финанслауҙы тәьмин итеү бурысы ҡуйылды, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәтендә.




12+

✓ Ә ауылда ҡалған йәш ғаиләләр төҙөлөш материалдары ала алмай яфалана. Бер кирбес цехы ла юҡ, урындағы халыҡтың төҙөлөш материалына ихтыяжын үтәрлек кенә булһа ла цех асылһа, эш урыны ла булыр ине кешегә.



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

**Төп борсоған мәсьәлә - эш урындары инде. Эш - социаль гарантия. Эш булһа, тормош күтәрлөк мөмкинлек тә була. Шуныңһыҙ бер ниндәй ҙә алға китеш, етеш тормош булмаясаҡ, демографияға ла шул йоғонто яһай. Халыҡты эшле итеү мәсьәләһен нисек тә хәл итеүҙе хәстәрләр ваҡыт күптән етте.**

# ЭШ, ЭШ КӘРӘК!

Ауыл ерендә, исмаһам, кооперативтар булдырырға, халыҡты үҙ шәхси хужалығында етештерелгән продукцияһын һатыуға йәлеп итергә була. Бөгөн ауыл халҡына ҡағылышлы бөтә социаль проблемалар эшһеҙлектән килә: эскелек тә, ситкә күсеп китеүе лә, ауыл хужалығының бөлгөнлөккә төшөүе лә, ғаилә ҡора алмай йөрөгән йәштәр ҙә, балаларҙы уҡытыу мөмкинлеге лә. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ошоно аңлап, тәүге көндәрҙән үк социаль өлкәлә лә тәртип булдырыу, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү йәһәтенән саралар күрә башланы. Был юҫыҡта эш дауам итһен һәм һәр районға айырым иғтибар бүлеү форсаты табылһын ине, тип теләйем.

Бына беҙҙең Белорет районы урманлы ҙур территорияны биләй, металлургия үҫешкән төбәк. Ә ауылда ҡалған йәш ғаиләләр төҙөлөш материалдары ала алмай яфалана. Белорет ҡалаһында ғына 500-ҙән ашыу ғаилә агаскә сиратта тора. Металлургия үҫешһә лә, бер кирбес цехы ла юҡ, урындағы халыҡтың төҙөлөш материалына ихтыяжын үтәрлек кенә булһа ла цех асылһа, эш урыны ла булыр ине кешегә. Инвесторҙар йәлеп итеп, бәлки, мәсьәләне хәл дә итеп булыр ине. Тик тәбиғәткә, урманға һаҡсыл ҡараш, санитар нормаларҙы үтәүгә ҡаты талаптар ҡуйылмаһа, инвестор тигәндәренән дә тик зыян ғына күрәсәк республикабыҙ.

Хаҡлы ялға сығыусыларҙың йәшен арттырғас, ауыл кешеһенең көнкүрешен яҡшыртыу, йәшәү сығанағын хәстәрләү ҙә кәрәк. Бөгөн ауылда мал үрсетеп, йәшелсә-емеш һатып көн күрәләр, әммә уларға ҡартайғансы шулай шәхси хужалығында бил бөгөүе енел түгел. Етештергән продукцияны ла әлеге көндә һата алмай бит ауыл кешеһе, был эш тә яйға һалынмаған беҙҙә. Һәр кем дә үҙенең магазинын асып ебәрә алмай, килешеү төҙөп тә эшләүе еңел түгел әле ҙур ойошмалар менән, ә етештергән продукцияны йәрминкәләр буйлап йөрөтөргә, баҙарға сығарып һатырға транспортһыҙ булмай.

Республикала махсус министрлыҡтар, ғилми-тикшеренеү институттары бар, уларҙа һәр район буйынса тәрән тикшеренеүҙәр үткәреп, аныҡ тәҡдимдәр менән бизнес-план кеүек проекттар эшләнһә һәм халыҡҡа, хөкүмәткә тәҡдим ителһә, бик ҡулай булыр ине. Исмаһам, ауыл халҡына кооператив ойоштороурға ярҙам итеп, яйға һалынған тотош эш схемаһы тәҡдим ителһен ине. Эш урындары булдырыу һәм тейешле эш хаҡы түләүгә өлгәшеү актуаль мәсьәлә булыуын бөтәһе лә белеп тора, был хаҡта әйтмәһәң дә булыр ине лә, әммә ул мәсьәләләрҙең тиҙерәк хәл ителеүен теләгәндән генә һүҙ башлауым.

**Хәлил АҪЫЛҒУЖИН,**
**социология фәндәре кандидаты.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Хеҙмәтләндереү өлкәһендә эшләүселәрҙең, шулай уҡ чиновниктарҙың тупаҫлығына йыш осрайһығыҙмы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Мәзинә ИРНАЗАРОВА, хеҙмәт ветераны:*** Үкенескә күрә,тормошобоҙҙа тупаҫлыҡ тигән нәмә бик ныҡ таралған. Был башҡаларға ҡарата кәмһетеүле мөнәсәбәткә булырға күнеккән айырым кешенең генә түгел, ул йәшәгән йәмғиәттең дә мәҙәнилек кимәлен күрһәтеп тора. Мәсәлән, элегерәк саҙа хеҙмәткәрҙәренең тәрбиәһеҙ ҡылыҡтарына ризаһыҙлыҡтар күп була ине. Хәҙер был өлкәлә эшләүселәрҙең - үҙегеҙ ҙә ишетеп-белеп торағыҙҙыр - телдәренән бал да май ғына тама. Сөнки улар хәҙер мөмкин тиклем күберәк һатып алыусыны йәлеп итә белергә тейеш, шунһыҙ, уны эшендә оҙаҡ тотмаясаҡтар. Ҡайҙа ул хәҙер тупаҫлыҡ күрһәтеү! Сауҙа салондарының ишеге төбөндә үк ингән бер кешегә йылмайып: "Ни теләйһегеҙ, һеҙгә ярҙам кәрәкме?"- тип, "бейеп" кенә торалар. Дөрөҫөн әйткәндә, былай ҙа бик яҡшы түгел икән: маҙаға тейәләр. Унан һатыусыларҙың быңдай яғымлы битлеген фашлау өсөн күп тә кәрәкмәй. Мәсәлән, берәй үҙенә оҡшаған кейемде үлсәп ҡарап та алмаһаң, һөмһөрҙәре ҡойола, ҡулындан тауарҙы йолҡа тартып алып, кире урынына элеп ҡуя ла, "Йөрөйҙәр шунда, күпме ваҡытымды әрәм иттем", тигәндәй, "үлтергәнсе" аҡайып ҡарап ҡала. Һатыусы һине һүҙ менән битәрләмәһә лә, был да бит тупаҫлыҡҡа инә, ул ғына ла түгел, хеҙмәтләндереүсенең мәҙәни кимәлен дә күрһәтә.

Үкенескә, беҙҙә хеҙмәтләндереүсе персоналдың клиенттарға мөнәсәбәте фәҡәт иҫәп-хисапҡа, аҡсаға бәйле. Был өлкәлә тиктәҫтән генә, холҡо һәйбәт булғанға йәки кәйефе яҡшы булыу сәбәпле ягымлы, кешелекле мөғәмәлә итеүсе хеҙмәткәрҙәр юҡ кимәлендә, айырыуса өлкән һәм урта йәштәрҙәге ҡатын-ҡыҙ һатыусылар араһында. Ә бына, ҡыуанысҡа, йәштәр күберәк эшләгән урындарҙа һулыштар ҙа икенсерәк - иркенерәк кеүек: үҙенә кәрәк әйберҙе күпме һайлап ҡарап йөрөһәң дә, һинә күҙ аҡайтыусы юҡ.

***Рөстәм МӘРӘНШИН, менеджер, Өфө ҡалаһы:*** Һүҙем медицина хеҙмәтләндереүе өлкәһенә ҡағыла. Әсәйемә хаҡлы ялға сығырға иртәрәк әле, шулай ҙа йыш ҡына ҡан баҫымы күтәрелеп, сирләштереп ала. Әле иһә грипп менән ауырып, ике аҙнаға яҡын больничныйҙа ятырға тура килде. Сираттағы таптыр участка табибына баргас, анализдары насар булыуға ҡарамаҫтан, хәлен дә һорашып та тормайынса, больничныйын ябып ҡайтарғандар. Эштән ҡайтһам, әсәйем ята, етмәһә, ҡан баҫымы күтәрелеп киткән. Киттем поликлиникаға. Беҙҙең терапевт үҙе больничныйҙа икән, урынына икенсе бер ханым ултыра. Хәлде аңлатып биргәс, аҡ халатлы был "шәфҡәт эйәһе" мине битәрләргә тотондо, һин кем бында: адвокатмы әллә прокурормы, табип өҫтөнән тикшереү яһап йөрөйһөң, тип.

Эш хатта шундай тоҫ алды: был, тотлоғоборак һөйләшкәнемде мыҫҡыллап, мине кәмһетеүгә барып етте. Мин был хәлде шул көйө ҡалдырырға теләмәнем, ләкин баш табипҡа инеп тороуҙы кәрәк тапманым, сөнки "кул ҡулды йыуа" икәнен яҡшы беләм. Бер биткә бөтәһен теҙеп яҙып, ҡала һаулыҡ һаҡлау бүлегенә үҙем илттем, ә икенсе данаһын Һаулыҡ һаҡлау министрлығына ебәрҙем. Ярай, шуға башым еткән: поликлиникала һөйләшеүгә алдан уҡ телефонымдың диктофонын көйләп, кеҫәгә һалып ингәйнем, шуны тыңлаттым. Күп тә үтмәне, ҡала бүлегенән дә, министрлыҡтан яуап алдым: "Инцидент тикшерелде, сирле терапевт урынында ваҡытлыса ҡабул итеп ултырыусы табипҡа, тәүге осраҡ тип иҫәпкә алып, шелтә бирелде, айлыҡ премиянан мәхрүм ителде", - тиелгән. Аҙаҡ мине баш табип кабинетына саҡыртып, теге ханымдан ғәфү үтендертеләр. Әсәйемде теге саҡ уҡ икенсе табипҡа беркетеп, больничныйын дауам иттергәйнеләр инде, хәҙер һауығып, эшләп йөрөй. "Юҡҡа шау-шыу күтәрҙең, башҡаса мин унда нисек барып, күҙҙәренә ҡарармын?" тип, минә үпкәләп алды-алыуын, ләкин әгәр шундай мөнәсәбәткә түҙеп, өндәшмәй ҡалһаң, быңдай хәлдең тағы ла ҡабатланыуы бар бит. Ә хәҙер, исмаһам, башҡа хеҙмәткәрҙәргә лә ғибрәт булды. Гәзит уҡыусылар ҙа һабаҡ алһын бынан, тип әйтеүем: һәр бер тупаҫлыҡ, кәмһетеүҙәргә түҙеп ҡалмағыҙ, иң тәүҙә үҙегеҙҙе ихтирам итергә өйрәнегеҙ. Шул саҡ ҡына әҙәп белмәгәндә тәртипкә өйрәтергә була, тимәксе инем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# МӘҠӘЛӘ ЯҘЫУ КИНӘНЕСЕН...

## үҙе яҙғандар ғына белә



**"Бөгөн һинә "Киске Өфө" гәзите килдеме?" - тип шылтырата Социалистик Хеҙмәт Геройы, СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы Хәнифә Искәндәрова. - Рауил Бикбаев менән әңгәмә бар, ҡыҙыҡһынып, яратып уҡып сыҡтым. Тос, фәһемле фекерҙәрен яҙып алдым. Яратам мин ул шағирҙы. Бүләк иткән китаптарын эргәмдә тотам. Бигерәк тә хәҙистәрендә күпме аҡыл, тәрбиә бар..."**

Хәнифә Сиражи ҡыҙы менән "Киске Өфө" гәзите сыға башлағандан алдырып уҡыйбыҙ һәм уның һәр һанындағы үҙебеҙгә оҡшаған мәҡәләләре, рубрикалары, мәҡәлә авторҙары, үҙ хәбәрселәр хаҡында фекер алышабыҙ. Бар рубрикалар ҙа, бигерәк тә "Әйт, тиһәгеҙ", "Көн ҡаҙағы", "Фекер төйөнө" "Фани донья", "Тарихнамә", "Комар", "Көнаүаз" рубрикалары үҙҙәре үк уҡыусының иғтибарын йәлеп итеп тора. Авторҙар ниндәй зыялы, фекерле. Нисек уҡымайһың уларҙың фәһемле сығыштарын!

Гәзиттең бай, образлы телен яратабыҙ. "Ысын башҡорт булам тиһәң, ошо гәзиткә яҙыл, уҡы, алдыр, тел байлығын шунан өйрән!"-тибеҙ ауылдаштарыбыҙға. "Инәйем дә шундай бай башҡорт телендә, мәҡәлдәр әйтеп һөйләшә торғайны, - ти Хәнифә Сиражи ҡыҙы. - Ҡарһүҙҙәрҙе дәфтәремә күсереп алам. Биолог булһам да, ғүмер буйы китап уҡыным, гәзит-журналдан өҙөлмәнем..."

Ысынлап та, совет заманында беҙ башҡорт телендә сыҡҡан бөтә гәзит-журналдарҙы алдыра инек. Мин бөгөн дә "Киске Өфө", "Йәншишмә", "Йүрүҙән", "Тайны здоровья" гәзиттәренә яҙылам. "Йәншишмә" - минең йәшлегем ауаздашы. Күп уҡыусыларым баҫманың "Йәш хәбәрсе"һе булды, ә үҙемә "Штаттан тыш хәбәрсе" исеме бирҙеләр. Матбуғат минең юлдашым, дуҫым булды. Хәбәр яҙыу кинәнесе яҙғандар ғына беләләр. Мин шунан кинәнес алып йәшәнем.

**Мөслимә МӨҒТӘБӘРОВА.**
**Салауат районы.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Партия фракциялары етәкселәре советының киңәйтелгән ултырышында Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Берҙәм Рәсәй" партияһы ағзаларын халыҡтың проблемаларына яҡын булырға саҡырҙы. Төбәк етәксеһе һүҙҙәренсә, республикала йәшәүселәр үҙҙәрен башҡортостандар тип аталған ҙур берләшмәнең бер өлөшө итеп тойорға тейеш. " Әгәр беҙ сәйәси лидерҙар булырға теләһәк, халыҡтың янында булырға, уларға ярҙам күрһәтергә, үҙ позициябыҙҙы әйтергә оялмаҫҡа тейешбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

✓Өфөлә Рәсәй сәнәғәт форумы барышында Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы төбәктең ҙур сәнәғәт предприятиелары етәкселәре менән осрашты. Уның һүҙҙәренсә, әле сәнәғәтте үҫтереү өсөн шарттар һәйбәт, 2018 йылда республика сәнәғәт етештереүенең 3,4 процентҡа артыуы ошо хаҡта һөйләй. Традицион тармаҡтарҙы - нефть химияһын, оборона производствоһын үҫтереүҙән тыш, иғтибарҙы яңы үҫеш нөктәләренә йүнәлтергә кәрәк, тип һөйләне Радий Хәбиров.

✓2019 йылдың 17-18 апрелендә Өфөлә Татарстан Президенты Рөстәм Минлеханов һәм Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ҡатнашлығында Татарстан Республикаһы көндәре уҙа. Саралар Башҡорт АССР-ы ойошторолоуға 100 йыл тулыуҙы билдәләүгә арнала. Ике туғандаш республиканың башлыҡтары Өфөлә бер нисә сәнәғәт предприятиеһына, Өфө дәүләт нефть техник университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты технопарктарына бара.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров тәүгә плей-офф алдынан "Салауат Юлаев" хоккей клубы уйынсылары менән осрашты. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы һүҙҙәренсә, төбәк хөкүмәте "профессиональ хоккейға булышлыҡ итергә теләй, ресурстар бар. "Командаһың дуҫ, көслө икәнен беләбеҙ. Быңдай коллектив менән уңышҡа, йәғни Гагарин Кубогына иҫәп торорға мөмкин тип уйлайым", - тип билдәләне Радий Хәбиров".

БЫЛ АЙҘА...

# РЕСПУБЛИКАМ ТЫУҒАН МӘЛ

**Көн имшене, шөкөр, шаҡай һынды шаҡарырлыҡ ҡаты һыуыҡтары менән үҙәккә үтмәне былай, рәхмәт инде уға. Яҙҙың тәүге билдәләре беленеп, ҡар йәшкәҙәй башлаһа ла, буранай тыумаҫ борон ҡыуанырға иртәрәктер әле. Шаҡай өсөн буранай биреүе лә бар кәрәгендә, ни тиһәң дә, март бурандары ла уйын түгел, ти торғайны донъя күргән өлкәндәр. Аҡман-тоҡман юҡҡа ғына тап ошо мәлде һағаламайҙыр, аң булыу кәрәк.**

Аҡман-тоҡман, тигәндәй... Март баштарында уйламаҫтан-көтмәҫтән килеп ябырылыусы яҙ бураны - аҡман-тоҡман үтмәйенсә, ергә ысын яҙ килмәй, тигән ырым бар халҡыбыҙҙа. Уның ауыҙ-тел ижадында ла ошо тәбиғәт күренешенә бәйле төрлө легендалар йәшәй. Шулай уҡ әҙәбиәтебеҙҙә лә. Тик ул инде риүәйәт түгел, ә ысын һәм шанлы тарихи көрәш ваҡиғаларын яҙғы буранға тиңләп, күренекле башҡорт яҙыусыһы Яныбай Хамматов "Аҡман-тоҡман" романын ижад иткән һәм унда йәш Башҡортостан Республикаһының тыуыу тарихын һүрәтләгән. Һәм, ысынлап та, буранайҙа тыуған республикабыҙ - 1919 йылдың 20 мартында Рәсәйҙең Үҙәк Совет власы менән Башҡортостан хөкүмәте тарафынан Башҡорт Совет Автономиялы Республикаһы тураһында Килешеүгә ҡул ҡуйыла һәм ул ошо йылдың 23 мартында матбуғатта баҫылып сыға. Шуға ла 23 март рәсми рәүештә Башҡорт Автономиялы Совет Республикаһының тыуған көнө булып иҫәпләнә. Был тарихи датаның 100 йыллығы хөрмәтенә Бөтөн донъя башҡорттар ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан Башҡортостандың үҙ билдәләнеше өсөн ул йылдарҙа башҡорт милли хәрәкәте башында тороусылар һәм ошо көрәштә ҡатнашып, ғәзиз ғүмерҙәрен аямаған 100 ҡаһармандың исемен мәңгеләштереү маҡсатында уларҙың исемлеге төҙөлдө. Ҡоролтай Башҡарма комитеты сайтынан ошо исемлек менән танышҡан замандаштарыбыҙ араһында милли хәрәкәт лидерҙарының туғандары, ейән-ейәнсәрҙәре, бүләләре табылып, был изге ғәмәл өсөн илебеҙҙең төрлө төбәктәренән



проект авторҙарына рәхмәт һүҙҙәре яҙып ебәрҙе. Ошо һәм тағы ла бик күп шәхестәребеҙҙең исемдәре республикабыҙ тарихына алтын хәрефтәр менән уйылған.

Быуат ваҡиғаһынан алып, бөгөнгө көнөбөҙгә тиклем республикабыҙ яҙмышында башҡа героик ваҡиғалар һәм ҡаҙаныштар ҙа байтаҡ булды, ләкин ниндәй генә заманда ла Башҡортостаныбыҙ ил йөҙөндә ҡаш булыр абруйын, тарих төпкөлөнән килгән милли традицияларын юғалтманы, шулай ҙа һуңғы "һигеҙ йыллыҡта" донор-төбәк булараҡ позицияларын юғалта башланы һәм күршеләрҙән артта ҡалды; халыҡ телендә әйткәндә,"асыусы"нан һуң килгән "ябыусы" осоронда күп ауылдарҙа мәктәптәр, фельдшер-акушер пункттары, дауаханалар ябылды, эскелек көсәйҙе, район хужалары "татлы йоҡоға" талды... Һигеҙ йылға һуңлабыраҡ булһа ла, бик ваҡытлы килде яңы Башлыҡ. Рәсәй президенты В.Путин Радий Хәбировты Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы итеп тап Башҡортостан Республикаһы көнө тәғәйенләп, 11 октябрҙә ошо хаҡтағы указға ҡул ҡуйыуында ла бер ғиллә бар һымаҡ тойолдо: Башҡортостан йәшәйәсәк, үҙ данын ҡайтарасаҡ әле! Радий Фәрит улы үҙе лә был хаҡта ныҡлы итеп: "Үҙебеҙҙе ихтирам итергә, республикабыҙ менән ғорурланырға нигеҙ бар... Күршеләр "Беҙ булдырабыҙ!" тип дөрөҫ әйтә, ә мин: "Беҙ яҡшыраҡ булдырабыҙ!" - тип әйткем килә. Алға, Башҡортостан!" - тине бит. Әйткәндәй, Республикабыҙ тыуған тарихи датаға тағы бер юбилей тап килеп кенә тора: 20 март - БР Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбировтың тыуған көнө (1964). Бының да үҙенә күрә хәйерле билдә, изге бер ишара булыуына бик тә ышанғы килә. "Тәртип булдырырға кәрәк. Республикала генераль йыйыштырыу үткәрергә. Үҙебеҙҙең уртаҡ йортобоҙҙа",- тигәйне ул вазифаһын башҡарырға тотонғанда. Һүҙҙең эштән айырылмауына көн дә шаһитбыҙ: етәксебеҙ көн дә халыҡ араһында һәм тап халыҡты борсоған социаль мәсьәләләрҙе көн тәртибенә ҡуйып ҡына ҡалмай, ә һәр айырым осраҡтың үтәлешен ҡәтғи контролдә тота, чиновниктарҙан буш һүҙ, вәғәҙәләр урынына, аныҡ эштәр талап итә. Бигерәк тә шуныһы ҡыуандыра: ниһайәт, республикала эскелеккә ҡаршы аяуһыҙ көрәш иғлан ителде. Был хаҡта ошоға тиклем әле бер генә етәксенең дә мәсьәләне шулай ҡабырғаһы менән ҡуйғаны, урындарға сығып, ошо көрәшкә ең һыҙғанып тотонған йәмәғәтселекте хуплап, компромисһыҙ көрәш башлап ебәргәне юҡ ине. Ысынлап та, күпме йылдар беҙ "яман ғәҙәт кенә түгел, ә ҡот осҡос социаль афәт" менән килешеп йә ошо бәләне күрмәмешкә һалышып йәшәнек... Ҡыҫҡаһы, яңы етәксе килеү менән, Башҡортостан тигән оло йортобоҙға гүйә саф һауа бәреп инде; республика халҡының йәшәйеш климаты ғына түгел, кешеләрҙең әйләнә-тирә тормошҡа ҡарашы, бер-береһенә мөнәсәбәте лә ыңғайға үҙгәрә бара кеүек: битарафлыҡтан айный йәмғиәт. Хаҡлыҡты ярып һалыусы асы, әммә ғәҙел һүҙҙәрегеҙгә, һәр бер башланғысығыҙға - ҡеүәт һәм дарман, Радий Фәрит улы! Республикабыҙҙы уның бер быуатлыҡ тарихы традицияларына тоғролоҡло һәм дә торошло итеү өсөн бергәләп тырышайыҡ: Башҡортостан халҡы - Һеҙҙең менән!

Был айҙың Башҡорт ғаиләһе көнө (1) менән башланып китеүе лә тәрән мәғәнәгә эйә: ғаиләләребеҙ имен, етеш йәшәй икән, тимәк, республикабыҙҙа ла эштәр көйлө, тигән һүҙ түгелме? Башҡорт ғаиләһе көнө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты башланғысы менән 2017 йылдан билдәләнә башланы һәм был бик дөрөҫ ҡарар булды, сөнки ил ныҡлығы - ул ғаилә ныҡлығы. Башҡортостаныбыҙҙа, шөкөр, әллә күпме татыу, уңған һәм талантлы ғаиләләр бар, тик шул уҡ ваҡытта һуңғы йылдарҙа социологтар айырылышыу статистикаһына ҡағылышлы саң һуға. Йәштәр рәсми рәүештә законлы нигеҙҙә ғаилә ҡорорға ашығып бармай, ә "партнерлыҡ" мөнәсәбәттәрен хуп күрә. Глобаль төҫ ала барған был күренеш башҡорт ғаиләһен ситләтеп үтһен ине. Милләтебеҙ һанын арттырайыҡ, тиһәк, ғаиләләр һанын арттырайыҡ. Федераль һәм төбәк кимәлендә ғаиләләргә һәр төрлө социаль ярҙам саралары күрелә, артабан да вәғәҙә ителә. 20 февралдә Федераль йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһендә РФ Президенты В.Путин был хаҡта ныҡлы итеп әйтеп үтте. Илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр бишеге лә ул ғаиләләр, халҡыбыҙ рухиәтенең ышанyслы һаҡсыһы ла улар. Ғаилә ҡеүәте һәм ныҡлығы ир-егет ҡулында булһа, ҡатын-ҡыҙ - уның ҡото. Был хаҡта гүзәл заттарыбыҙ ҡолағына Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө (8) айырым-айырым матур, яғымлы һүҙҙәр әйтелер, гөлләмәләр бүләк ителер. Яҙҙың тәүге сағыу байрамы бер кемде лә битараф ҡалдырмаҫ.

Был айҙа башҡа байрамдар, һөнәри көн һәм күренекле даталар байтаҡ. Уларҙы ла иҫкә төшөрөп үтеү кәрәктер: Бөтөн донъя граждандар оборонаһы (**1**), Бөтөн донъя яҙыусы һәм Бөтөн донъя ҡырағай тәбиғәт (**3**), славяндарҙың Масленица байрамы (**4**), Халыҡ-ара теш табибы (**6**), РФ архивтар (**10**), Наркотиктарҙың законһыҙ әйләнешен контролдә тотоусы хеҙмәткәрҙәр (**11**), Халыҡ-ара ҡулланыусыны яҡлау (**15**), Сауҙа, көнкүреш хеҙмәте һәм торлаҡ-коммуналь эшсәндәре (**17**), Һыу аҫты диңгеҙселәре (**19**), Халыҡ-ара бәхет (**20**), Бөтөн донъя шиғриәт, Бөтөн донъя ҡурсаҡ театры, Халыҡ-ара урман (**21**), Бөтөн донъя һыу ресурстары (Һыу көнө) (**22**), Гидрометеорология хеҙмәткәрҙәре (**23**), Бөтөн донъя туберкулезға ҡаршы көрәш (**24**), Рәсәй мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре (**25**), Бөтөн донъя театр (**27**) көндәре билдәләнәсәк.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**15** - данлыҡлы йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Рамаҙан ЙӘНБӘКОВҡа - 85 йәш** (1934).

- фольклорсы, йәмәғәт эшмәкәре, 2002-2006 йылдарҙа Бөтөн донъя башҡорттар ҡоролотайы Башҡарма комитеты рәйесе, филология фәндәре докторы, профессор, академик, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Әхмәт СӨЛӘЙМӘНОВ**тың тыуыуына - **80 йыл** (1939-2016).

- **20** - Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы **Радий ХӘБИРОВҡа - 55 йәш** (1964).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Указы менән республика Хөкүмәте йәш сабыйҙар өсөн йыйылманы раҫланы. Яңы тыуған балалар өсөн бүләктең хаҡы 1600 һумдан артмай (бығаса 1180 һум ине). Йыйылмаға алты әйбер инә: балалар юрғаны, башҡорт биҙәге сигелгән биләү, кофта, бала кейеме, кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән башлыҡ һәм Башҡортостан Башлығынан ҡотлау открыткаһы.

✓Башҡортостандың Аҫҡын районы хакимиәте башлығы Фларит Усманов вәкәләттәрен ваҡытынан алда һалды. Аҫҡын районы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр һәм кадрҙар сәйәсәте буйынса урынбаҫары Фаат Фәтхуллин да хаҡлы ялға китте. Совет ҡарарына ярашлы, Ришат Дихин Аҫҡын районы башлығы вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул республиканың Яҙыусылар берләшмәһендә, Башҡортостан Мәғариф министрлығында эшләгән, Ағиҙел ҡалаһы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары - мәғариф бүлеге етәксеһе булған.

✓Сибайҙа яңы мәҙәни проект тормошҡа ашырыла - башҡорт әҙәбиәте классиктарының әҫәрҙәре буйынса аудиокитаптар сығарыла башланы. Проектҡа башҡорт яҙыусыларының 75 әҫәре индерелгән. Проекттың маҡсаты - башҡорт авторҙарының китаптарын популярлаштырыу, аудиторияны киңәйтеү.Проект Рәсәй Президентының 265 мең һумлыҡ грантына лайыҡ булған.

✓Александр Курносов рәсми рәүештә "Салауат Юлаев" хоккей клубының генераль директоры итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем етәксе вазифаһын башҡарған Курносовтың кандидатураһы 2019 йылдың 26 февралендә раҫланды. Шуны билдәләп үтәйек: 2017 йылдан "Салауат Юлаев"ҡа Таһир Ибраһимов етәкселек итте, ләкин быйыл 10 ғинуарҙа вазифаһынан бушатылды.

✓Быйыл Башҡортостандың 100 йыллығы уңайынан 53 объектты файҙаланыуға тапшырыу күҙаллана. Юбилей" объекттары араһында - 19 мәктәп, 14 балалар баҡсаһы, мәҙәниәт һәм һаулыҡ һаҡлау объекттары, ике янғын депоһы һәм 12 спорт комплексы, шул иҫәптән Өфөнөң Затон биҫтәһендә Спорт әҙерлеге үҙәге. Һуңғыһында быйыл уҡ Йәйге халыҡ-ара балалар уйындары уҙа.

**✓ Башҡортостанда 2017 йылдың уртаһынан торлаҡ төҙөү өсөн аҡса йыйыу системаһын индереү проектының тәүге ҡатнашыусылары льготалы процент ставкаһы буйынса торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға кредит ала башланы.**



БЫНАҒАЙЫШ!

# ДОНЪЯ - ҠУЛАСА...

**...әйләнә лә бер баҫа, тигәне алдыбыҙға килеп тороуы булыр. Тарих тәгәрмәсе кирегә әйләнәме, әллә барыһына баяғы ҡуласа гәйеплеме - белгән юҡ, мәгәр йәмғиәтебеҙҙәге синыф айырмалығы үҙенең һуңғы нөктәһенә - Бөйөк Октябрь революцияһынан алдағы ярлы-ябаға - помещик һәм капиталистар осорона әйләнеп ҡайтты, тип әйтергә лә була.**

Айырма тик шунда ғына: ваҡыт арбаһы күҙ эйәрмәҫ тиҙлектәге атом реакторы менән алышынды, ә яурынына штыклы винтовка аҫҡан батша һалдатын бөгөн лазер ҡоралы менән идара итергә һәләтле инженер-программасы һалдаттар алыштырҙы. Рәсәй оборона министры Юрий Борисов әйтмешләй, "...юғары технологияға эйә ҡорал, ҡоралланыуҙың 2025 йылға тиклемге яңы дәүләт программаһына ярашлы, күп йәһәттән Рәсәй армияһының йөҙөн билдәләйәсәк". Ә ниндәй булаҫаҡ һуң ул армиябыҙҙың йөҙө? Был һорауға министр урынбаҫары урынына Ленсовет депутаты Петров тигән кеше яуап әҙерләп тә ҡуйған икән. Татлы вәғәҙәләре менән халыҡты төп башына ултыртырға оҫтарған бәғзе бер депутат ишараттары, эреле-ваҡлы чиновник өйөрө, быуат ахырының буйрағында болғанып, аңһыҙҙан ғына олигарх-капиталистар булып киткән йыйын әтрәгәләм, тамаҡтары ашҡа тейенеп, буйтым булышып алғас, "кеше - кешегә дуҫ һәм иптәш" тигән быуат лозунгыһынан гәрләнеп, фәҡәт "иҙеүсе - иҙелеүсе" мөнәсәбәттәренә ҡоролған батша заманын һағына башлаған икән дә! Ышанмаһағыҙ, Яндексты асып ҡарағыҙ: "не товарищ, а господин" тип яҙһаң, яуап килеп тә сығасаҡ. Ленсовет депутаты Владимир Петров бик тә әфәнде булырға теләй һәм эште көс структураларынан башларға ҡарар иткән, ти. "Беҙҙең армия 1990 йылдарҙағы артта ҡалыуҙан тиҙ арала аяҡҡа баҫып, донъяла иң ҡеүәтлегә әйләнде",- тип яҙа ул Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Д.Медведевҡа үтенес хатында. Артабан Петров ниндәйҙер "мәғәнә үҙенсәлектәре - йәғни яңы төр ғәскәрҙәр барлыҡҡа килеүе, тарихи подразделениелар тергеҙелеүе, хеҙмәттең әхлаҡи йәһәттән" үҙгәреүе табан барыуы хаҡында бигүк аңлашылып етмәгән фәлсәфә ҡора һәм әлеге ваҡытта Эске эштәр министрлығы даирәһендә, армияла һәм башҡа көс структураларында һаман да "иптәш" тип өндәшеүҙе "әфәнде"гә ("господин") алыштырырға тәҡдим итә. Сөнки, ти ул, "әфәнде" һүҙе хәрбиҙең намыҫын һәм статусын, ил тормошонда юғары миссияһын һәм әһәмиәтен күрһәтеп тора. Ә "иптәш"тәребеҙ, тимәк, дошмандан ил именлеген күкрәге менән ҡаплап көрәшмәгән, намыҫын ғүмеренән артыҡ күрмәгән, тиергә итәме депутат Петров? Был ғына ла түгел, революциянан һуң большевиктар батша армияһында һәм жандармерияла ҡулланылған "әфәнде" һүҙен "яуыз ниәттәрҙә" "иптәш" тигән прогрессив һүҙ менән алыштырған, тип әҫтәй ул һәм "тарихи ғәҙеллекте" ҡайтарыуҙы һорай. Хәрбиҙәр үҙҙәре нисек ҡарар бындай тәҡдимгә? Ә бына революция бишеге - пролетарийҙар ҡалаһы Питерҙа, ябай уҡытыусы ғаиләһендә тыуып үҫкән был "әфәнде" һәм шоумен-депутаттың сәйер ҡылыҡтары һәм әлегеләй байтаҡ тугҙа яҙмаған тәҡдимдәренә уның "Берҙәм Рәсәй" буйынса фирҡәләш "иптәш"тәре, депутат коллегалары бөтөнләй битараф икән. Һөйөнөргәме быға, көйөнөргәме?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СИБАЙ ХӘЛДӘРЕ



**"Кәрәк булһа, Сибай карьерының шахталары ябылыр". Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров 27 февралдә Сибай халҡы менән осрашыуҙа ошо хаҡта белдерҙе.**

Урал тау-металлургия компанияһының генераль директоры Андрей Козицын Сибай карьерындағы хәл һәм унда алып барылған эштәр тураһында һөйләне. Сибайҙа йәшәүселәрҙең береһе карьерҙы ябыуҙы һәм бөтә эштәрҙе туҡтатыуҙы, ҡаланы "таҙа урынға" күсереүҙе талап итте. Әлеге ваҡытта, Андрей Козицын һүҙҙәренсә, шахтаның яртыһы ябылған һәм таусылырҙы эшкә урынлаштырыу мәсьәләһе тора - 800 самаһы кеше эшһеҙ ҡала. Ул шахта ябылған осраҡта шахтерҙарҙың һәм тау мастерҙарының эш мәсьәләһе хәл ителер, тип вәғәҙәләне. "Әгәр ҙә миңә фәнни мәғлүмәттәр, проектлау институттары, ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса республика структуралары, Роспотребнадзор күрһәтмәләре нигеҙендә эҙемтәләрҙе бөтөрөү өсөн шахтаны туҡтатырға кәрәк тип әйтһәләр - шахта туҡтатылыр. Бер ниндәй ҙә иҡтисади дәлилдәргә ҡарамаҫтан - вәғәҙә бирәм. Әле эштәр алып барыла, ваҡыт билдәләнгән, барыбыҙ ҙа был эштәр һөҙөмтәле булыр, тип ышанабыҙ", - тине Радий Хәбиров.

# ТОРЛАҠЛЫ БУЛ!



**Башҡортостанда хәҙер теләгән һәр кем торлаҡ төҙөүгә аҡса туплау программаһы ярҙамында йылына 6 процент менән ипотека алыу мөмкинлегенә эйә, тип хәбәр иттеләр республика Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтендә.**

Белдереүҙәренсә, Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, 2019 йылдың 1 мартынан торлаҡ төҙөүгә аҡса туплау программаһында ҡатнашыусылар өсөн сикләүҙәр алынды. Быға тиклем был программала торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж граждандар, шулай уҡ балалы ғаиләләр һәм 35 йәшкә тиклемге йәш ғаиләләр генә ҡатнаша ала ине.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда 2014 йылдан торлаҡ төҙөү өсөн аҡса йыйыу системаһын индереү проекты уңышлы тормошҡа ашырыла. 2017 йылдың уртаһынан ошо ипотека-туплау программаһының тәүге ҡатнашыусылары льготалы процент ставкаһы буйынса торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға кредит ала башланы. Әлеге ваҡытҡа 1300-ҙән ашыу ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан. Программа шарттары буйынса, граждандар партнер банктарҙың береһендә (Һаҡлыҡ банкы, Уралсиб) 3-6 йылға вклад аҫалар. Ҡатнашыусының айлыҡ взносына республика бюджетынан взностың суммаһынан 30 процентҡа тиклем күләмдә премия күсерелә. Бюджет премияһын иҫәпкә алып, вклад буйынса һөҙөмтәле процент ставкаһы йылына 20 процентҡа етергә һәм юғарыраҡ булырға мөмкин. Был уртаса һәм уртасанан кәмерәк килем алған ғаиләләргә булаҫаҡ торлаҡ кредиты өсөн тәүге игәнә йыйырға мөмкинлек бирә. Аҡса йыйыу осоро тамамланғас, программала ҡатнашыусылар йылына 6-7 процент менән ипотека алыу мөмкинлегенә эйә була.

"Программа ярҙамында республика биләмәһендә фатир йәки башҡа торлаҡ һатып алырға, шулай уҡ йорт һалырға йәки шәхси торлаҡ өсөн ер участкаһы алырға мөмкин. Бынан тыш, аҡса бынан алда алынған ипотеканы ҡаплауға йүнәлтелергә мөмкин", - тип билдәләне Башҡортостандың Ипотека-туплау механизмдарын һәм программаларын үҫтереү дирекцияһы етәксеһе Евгений Декатов.

# АЙЫРЫМ ЙЫЙЫҒЫҘ




**Үткән аҙналағы Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров ведомство етәкселәренә һәм яуаплы кешеләргә сүп-сарҙы айырым йыйыуға күсеү механизмдарын уйларға ҡушты.**

"Ошо мәсьәләне хәл итһәк, ҡалдыҡтарҙы 20 проценттан 30 процентҡа тиклем ҡыҫҡарта алырбыҙ. Реформаның маҡсаты - йылдан-йыл күбәйгән сүп-сарҙы кәметеү. Әгәр айырым йыйыуға күсмәһәк, быны башҡарып сыға алмайбыҙ. Халыҡты шуға әҙерләргә кәрәк", - тип билдәләне республика етәксеһе. Радий Хәбиров ҡаты коммуналь ҡалдыҡтарҙы сығарған өсөн билдәләнгән түләүҙең ҡала халҡы өсөн айына һәр кешегә - 70 һум, быға тиклем сүп-сар йыйыу системаһы ойошторолмаған торак пункттарҙа йәшәүселәр өсөн 35 һум тураһында йөкләмәһенең үтәлешен контролдә тотоуҙы һораны. Шулай уҡ икеләтә түләүҙәр һәм яңылыш иҫәпләүҙәр булмаҫҡа тейеш, тип билдәләне. "Мәрхүмдәрҙе лә иҫәпләйҙәр тигән мөрәжәғәттәр бар, бындай хәлгә юл ҡуйырға ярамай. Ауыл халҡы иҫәпләнгән сумма булһа ла, сүп-сарҙы сығармауҙары өсөн борсола. Аңлашыла, яңы системаға саҡ күсә башланыҡ, ләкин бындай хәлдәрҙе тиҙ арала төҙәтергә кәрәк".

# ТАБИПТАР ЕТЕШМӘЙ



**Республиканың медицина учреждениеларында белгестәрҙең дөйөм һаны 100 кешегә арттан. 2018 йылдың октябренән бөгөнгәсә медицина ойошмаларына 779 табип килгән, шуның менән бергә төрлө сәбәптәр буйынса 609 белгес эшен ҡалдырған. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"ндә ошондай һандар килтерҙе.**

Уның һүҙҙәренсә, кадрҙарға ҡытлыҡты бөтөрөүҙең ыңғай динамикаһына ҡарамаҫтан, ашығыс медицина ярҙамын күрһәткән белгестәргә бәйле хәл әүәлгесә насарайыуға табан бара. "Беҙҙең өсөн кадрҙарға ҡытлыҡты тултырыу өсөн төп сығанаҡ - белем биреү учреждениелары студенттары сығарылышы. Медицина университетында төрлө курстарҙа ауыл райондарынан 4005 студент уҡый. Алдағы өс йылда уларҙың 1050-һе үҙәк район һәм ҡала дауаханаларына эшкә урынлашырға ниәтләй. Маҡсатлы йүнәлтмәләрҙең исемлектәре төҙөлгән", - тип һөйләне Максим Забелин. 2019 йылда "Ауыл табибы" программаһы буйынса 99 табипҡа бер миллион һум, шулай уҡ 10 фельдшерға 500 мең һум аҡса бирелә. "Ауыл табибы" республика программаһы буйынса 55 фельдшерға 50 мең һум тапшырыла. Үҙған йылдарҙа "Ауыл табибы" программаһына эләкмәгән тағы 150 табипҡа Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса бер миллион һум түләнә.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Краснокама районының Николо-Берёзовка ауылы республика Хөкүмәте бойороғо менән төбәк әһәмиәтендәге тарихи ауыл статусын алды. Был ауылға 1550 йылда Кама буйында ҡәлғә һәм Башҡортостанда тәүге рус ауылы булараҡ нигеҙ һалынған. Бер нисә быуат дауамында Кама буйында ҙур сауҙа үҙәге һаналған.

✓Өфөнөң Совет районы башлығы вазифаһын башҡарыу бурысы Рөстәм Рәхмәтуллинға йөкмәтелде. Рөстәм Рәхмәтуллин 1976 йылда Өфөлә тыуған. Башҡорт дәүләт аграр университетын, Хеҙмәт һәм социаль мөнәсәбәттәр академияһын, Өфө дәүләт нефть техник университетын тамамлаған. Күп йылдар газ тармағында эшләгән. Бөгөнгә вазифаһына тиклем - Совет районы хакимиәте башлығы урынбаҫары.

✓Башҡортостандың дөйөм белем биреү ойошмаларына тағы 150-гә яҡын төрлө маркалы мәктәп автобустары кәрәк. Ошо маҡсатҡа төбәктең Мәғариф министрлығынан 204 миллион һум ҡаралған, был 106 автобус һатып алырға мөмкинлек бирергә тейеш. Әле уҡыусыларҙы йөрөтөү өсөн 1321 мәктәп автобусы йәлеп ителгән. Үҙған йылда республика аҡсаһына 183 мәктәп автобусы һатып алынған. Төбәктә көн һайын 40 меңдән ашыу уҡыусы мәктәпкә автобус менән йөрөй.

✓Республиканың Баймаҡ районында дөйөм таралған файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу буйынса тәртип урынлаштырыла, хәҙер "ҡара ҡаҙыусылар" менән хәл контролдә тотола. Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Фәнис Әминев ошо турала белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, әле был районда дөйөм таралған файҙалы ҡаҙылмалар сығарыу кластеры булдырыла. Инспекторҙарҙың бөтә күсмә төркөмдәре видео һәм фототеркәү саралары менән йыһазландырыла.

✓Илвир Нурдәүләтов Киров районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Үҙған йылдың ноябренән Илвир Нурдәүләтов баш ҡаланың Совет районын етәкләне, унан алда ошо уҡ район башлығының беренсе урынбаҫары вазифаһын биләне.Быға тиклем Илвир Нурдәүләтов Өфө ҡалаһы Киров районының торлаҡ-коммуналь өлкәһендә етәксе вазифаларҙа эшләне.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Һыуҙы таҙартыу һәм зарарһыҙландырыу өсөн реагенттар резервы булдырылған; эсәр һыуҙы зарарһыҙландырыу ҡоролмалары һәм системалары әҙерләнә; ташҡын шарттарында аналитик контроль үҙгәнең эшен ойоштороу ҡарала.*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Өфө ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә уҙған аҙнала булып үткән сараларҙы һәм ваҡиғаларҙы барлауҙан башланды. Улар, нигеҙҙә, йәмғиәттең социаль-иктисади яғына ҡағыла. Иң мөһиме - "Ростелеком" компанияһы етәкселеге менән осрашып, көн үҙәгендә торған йүнәлештәрҙе билдәләү һәм "Аҡыллы ҡала" проектын тормошҡа ашырыу буйынса эшсе төркөм ойоштороу булғандыр. Сөнки заман менән бергә атлайым тиһәң, "аҡыллы" проекттарҙы тормошҡа ашырыу, ошо стандарттар буйынса эшләү - төп талаптарҙың береһе. Шуға ла Өфө ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин был мәсьәләгә етди иғтибар йүнәлтте.**

# ТАШҠЫН КИЛӘ ТАШЫП,

## һаҡланырға ашыҡ!

Шулай уҡ мәрҙың күҙ уңынан урамдарҙы, ихаталарҙы, ҡыйыҡтарҙы ҡарҙан таҙартыу ҙа, янғын мәсьәләһе лә ситкә китмәне. Сөнки һуңғы аҙнала ғына республикала "ҡыҙыл әтәс" йорттарҙы ғына яндырып ҡалманы, кеше ғүмерҙәре өҙөлөүгә лә сәбәп булды. Был мәсьәләне Хөкүмәттә үткән кәңәшмәлә Республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров та айырым иғибарға алғайны. Өлфәт Мансур улы район хакимиәттәре башлыҡтарына һәм надзор органдарына тейешле профилактика саралары ойоштороуҙы йөкмәтте. Янғын хеҙмәте белгестәре әйтеүенсә, бер йылдан һуң янғынды иҫкәртергә тейешле ҡорамалдар батареяһының көсө бөтә, шуға күрә улар тетән есенә сигнал бирмәй. Был йәһәттән халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барырға, ҡайҙа махсус ҡорамалдар ҡуйылғанын иҫәпкә алып, уларҙың хеҙмәт ваҡыты үтә башлаһа, иҫкәртеп йөрөп сығыу зарурлығы билдәләнде. Шулай уҡ киң мәғлүмәт сараларында ла аңлатыу-иҫкәртеү эше киң йәйелдерелергә тейеш.

Хәүефһеҙлек темаһы, ғөмүмән, кәңәшмәлә төп урында торҙо, тиергә мөмкин, сөнки тиҙҙән ҡояш йылы нурҙарын ергә йәлләмәй һибеп, ҡар ирей башлаясаҡ. Баш ҡаланың ике йылға араһында яткан утрау булыуы ла был мәсьәләгә етди иғтибар талап итә. Баш ҡаланың Граждандар һағы идаралығы начальнигы Рафаэль Әхмәтов белдереүенсә, быйылғы ташҡынды өс сценарий буйынса күҙалларға мөмкин: һыу күләме аҙ (330-660 сантиметр) булғанда, һыу ярҙан сыҡмай һәм Дим, Ленин райондарының ҡайһы бер урамдарына ғына инеүе мөмкин. Уртаса кимәлдә (700-800 сантиметр) Дим, Ленин, Киров райондарының биҫтәләре һыу аҫтында ҡалыу ихтимал. Был территорияға дөйөм алғанда 1699 йорт (5559 кеше йәшәй) инә. Һыу нығ ташҡанда (850-900 сантиметр) атап үтелгән райондарға Калинин районы ла өҫтәлә. Был осраҡта инде 7275 кеше йәшәгән 2186 йортто һыу баҫыуы ихтимал. 20 февралгә ҡарата Ағиҙел йылғаһы бассейнындағы ҡар ҡатламы башҡа йылдарҙағы ошо декада күрһәткестәре менән сағыштырғанда 20 процентҡа түбәнерәк. Ҡарҙың бейеклеге лә 50-65 сантиметр тәшкил итә һәм норманан 5-15 процентҡа түбән. Ошо мәғлүмәттәрҙән сығып фекер йөрөткәндә, быйыл Кооператив ялан, Нижегородка, Затон, Кузнецов Затонын һыу баҫыуы һәм Романовка (Дим районы) ауылы менән Козарез урамы (Ленин районы) араһындағы автомобиль юлы аша һыу китеүе мөмкин.

Ҡала территорияһында ташҡынға ҡаршы 24 штаб, 11 күҙәтеү посы, граждандарҙы ваҡытлыса урынлаштырыуҙың 54 пунктын ойоштороу планлаштырылған, 12 гидротехник ҡоролма ташҡынға әҙер. Граждандар һағы идаралығы МБУ-һының ярҙам-ҡотҡарыу отрядының личный составы кешеләрҙе бо́ҙло һыуҙан сығарыу һәм һыу сығанаҡтарында зыян күреүселәргә ярҙам күрһәтеү буйынса күнекмәләр үткән. Отрядтар барыһы ла йөҙөү саралары менән тәьмин ителгән, шул иҫәптән былтыр халыҡта 363 шәхси йөҙөү средстволы булыуы асыҡланған. Март һуңында граждандарҙы иҫкәртеү маҡсатында 104 электрон сирена эшләй башлаясаҡ.

Яҙғы ташҡын һыу баҫыу менән генә түгел, эсәр һыуҙың бысраныу ихтималлығы менән дә хәүеф тыуҙыра. Был тема буйынса "Водоканал" директоры Ильяс Ғилметдинов сығыш яһаны һәм предприятиеның ошо яуапле осорҙа эшләргә тулыһынса әҙер булыуын белдерҙе. Аныҡлап әйткәндә, ойошмала һыу төрлө кимәлгә күтәрелгән ваҡытта ҡаланың һыу алыу урындарындағы һыу баҫҡан зонаға эләккән скважиналар һаның билдәләү мөмкинлеген бирген мониторинг системаһы эшләнгән. Шулай уҡ Өфө водозаборҙарының барлыҡ 270 скважинаһын һәм уларҙың ныҡлығын тикшереү планлаштырылған, һыуҙы таҙартыу һәм зарарһыҙландырыу өсөн реагенттар резервы булдырылған; эсәр һыуҙы зарарһыҙландырыу ҡоролмалары һәм системалары әҙерләнә; ташҡын шарттарында аналитик контроль үҙгәнең эшен ойоштороу ҡарала. Ошо осорҙа барлығы 1700 пробанан 15 мең тирәһе анализ үткәреләсәк. Һыу сифаты тураһында мәғлүмәт менән ойошманың рәсми сайтында танышырға мөмкин буласаҡ. Ильяс Ғилметдинов белдереүенсә, барлыҡ эштәр 30 мартҡа тиклем тамамланырға тейеш.

Күптәр ғүмер буйы йыйған мөлкәтен ҡыҙғанып, хатта һыу баҫҡанда ла йорттарын ташлап китергә теләмәй. Был мәсьәлә нисек хәл ителә һуң? Был хаҡта Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса полиция идаралығы начальнигы Илгиз Байсурин таныштырҙы. Йылдағыса, ташҡын осоронда һыу баҫҡан урындарҙа һәм халыҡты ваҡытлыса урынлаштырыу пункттарында тәүлек әйләнәһенә дежурство ҡуйыласаҡ. Шулай уҡ эвакуация, граждандар һағы көстәре һәм ҡотҡарыу саралары маршруттарында юл хәрәкәте хәүефһеҙлегенә лә етди иғтибар биреләсәк. Һыу баҫыу ихтималлығы булған урындарҙы патруллеү ойоштороласаҡ һәм башҡа эштәр башҡарыласаҡ. Әлеге ваҡытта полицияның участка уполномоченныйҙары ихаталар буйлап һәм баҡсаларында даими йәшәүселәрҙең исемлеген тикшерә, балыҡсылар менән әңгәмәләр ойоштора.

Әлбиттә, махсус хеҙмәттәр үҙҙәренең бурысына яуаплы ҡарай һәм уны еренә еткереп үтәргә тырыша. Әммә күп нәмә халыҡтың үҙенән дә тора икәнлеген дә онторға ярамай. Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар, тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## АУЫЛ СТАРОСТАЛАРЫ

**Башҡортостанда "Ауыл старосталары тураһында" республика законын ҡабул итергә әҙерләнәләр. Был уларҙың вәкәләттәрен, тәғәйенләү тәртибен һәм халыҡ, урындағы үҙидара органдары менән үҙ-ара эш итеүен нығытырға тейеш.** Владимир Путин ауыл старосталары институтын нығытҡан федераль законға 2018 йылдың 18 апрелендә ҡул ҡуйҙы. Унда билдәләнгәнсә, старостаны тораҡ пункттың граждандар сходы күрһәтеүе буйынса муниципаль берәмектең вәкиллекле органы тәғәйенләй. Дәүләт вазифаһын, дәүләт граждандар хеҙмәте вазифаһын, муниципаль вазифа йәки муниципаль хеҙмәт вазифаһын биләгән кеше староста була алмай. Старостаның вәкәләттәр ваҡыты ике йылдан кәм һәм биш йылдан күп булмаҫҡа тейеш. "Әлеге ваҡытта республикала 3500-ҙән ашыу ауыл старостаһы эшләй. Был институт - муниципалитеттарҙы үҫтереү өсөн етди ресурс. Күпселек старосталар, ә уларҙың төп өлөшөн ауылдың өлкән йәштәге хөрмәтле кешеләре тәшкил итә, ауылдаштарын үҙ артынан эйәртә, үҙҙәре лә тораҡ пункттарҙы төҙөкләндереүҙә әүҙем ҡатнаша, социаль мәсьәләләрҙе хәл итә, төрлө саралар ойоштора", - тип билдәләй "Башҡортостандың муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһының идара рәйесе Алексей Шмелев. Уның һүҙҙәренсә, республика законының төп етешһеҙлегенең береһе староста эшен матди дәртләндереү менән бәйле. Законда мөмкинлек булған саҡта бындай түләүҙәрҙе ауыл биләмәһе үҙенең дотациялы бюджетынан тормошҡа ашырырға тейеш тип яҙылған. Шмелев фекеренсә, старостаның эшен матди дәртләндереү өсөн уларҙы республика ҡаҙнаһынан финанслауҙы күҙ уңында тоторға кәрәк.

## АЛКОГОЛЬ ҺАТМА!

**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары республикала алкоголь һатыуҙы киске сәғәт 10-дан иртәнге 10-ға тиклем сикләү тураһында башланғыс менән сығыш яһарға ниәтләй.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, әлеге ваҡытта магазиндарҙа төнгө сәғәт 11-ҙән иртәнге 8-гә тиклем спиртлы эсемлектәр һатыу тыйыла. "Әле социаль селтәрҙәрҙә алкоголде ваҡытлыса һатыуҙы артабан сикләү буйынса күп яҙалар. Киске сәғәт 10-дан иртәнге 10-ға ҡәҙәр сикләү индерергә тиген тәҡдим бар, - тип белдерҙе Дәүләт Йыйылышы рәйесе урынбаҫары Рөстәм Ишмөхәмәтов алкоголь продукцияһының законһыҙ әйләнешенә ҡаршы тороуға арналған түңәрәк өҫтәл ултырышында. - Был - эшҡыуарҙар берләшмәһе һәм башҡа ҡыҙыҡһынған яҡтар ҡатнашлығындағы фекер алышыу өсөн тағы бер ҙур мәсьәлә". Түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыусылар әйтеүенсә, төнгө һәм иртәнге сәғәттәрҙә алкоголь һатыуҙы тыйыу башланғысын бигерәк тә эшҡыуарҙар араһында хуплмағандар бар. Шуға һәр яҡтың фекерен иҫәпкә алырға кәрәк. Спиртлы эсемлектәрҙе ваҡлап һатыу өлкәһендә контролде көсәйтеү өсөн депутаттарға алкоголь продукцияһын һатҡан дөйөм тукланыу предприятиелары өсөн талаптарҙың тулы исемлеген билдәләргә мөмкинлек бирген закон сығарыу инициативаһын индереү мөмкинлеген ҡарарға тәҡдим ителде.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Киҙеүҙән

❖ Йәмәғәт транспортында саҡта ауыҙға 1-2 бөртөк ҡәнәфер, лимон ҡабығы ҡабығы була. Был продукттарҙағы фитонцидтар вирустарҙы юҡҡа сығарасаҡ.

❖ Миҙгел ауырыуҙары көсәйгән саҡта һөттән һәм һөт ризыҡтарынан баш тартығыҙ. Һәр иртә әфлисун, грейпфрут һуты эсегеҙ, кисен һуған, һарымһаҡлы салат ашағыҙ.

### Йүткереү

❖ Балаларҙы ҡоро йүткереүҙән дауалау өсөн кишер һуты һығып, уға иретелгән шәкәр ҡушырға. Тәмле лә, шифалы ла дарыу килеп сыға.

### Аҡ фасоль

❖ Ҡайһы саҡта бәрелгән урын оҙаҡ ауырта. Бындай саҡта ярты кг аҡ фасолде бешереп, иҙергә лә, һыуына башлағас, ауыртҡан урынға һалып, кизе-мамыҡ сепрәк менән бәйләргә була. Өҫтөнән йылы шарф бәйләргә була. Компресс төнгөләккә эшләнә.

### Фибриома

❖ Был мәкерле сирҙе халыҡ ысулы менән дауаларға була. Киптерелгән 4 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөн термосҡа һалырға, 2,5 стакан бер аҙ йылытылған 90 процентлы спирт (спиртты утта йылытырға ярамай, уны һауыты менән йылы һыуға тығып алығыҙ) ҡойорға. 3 тәүлек төнәткәс, һөҙөргә. Үҫеп ултырған алоэ гөләнән ҙур ғына бер япраҡты ҡырҡып алырға, таҙа сепрәк менән һөртөргә (йыуырға ярамай), ит турағыстан үткәрергә, 4 ҡалаҡ шыйыҡ бал өҫтәргә һәм ҡайын бөрөһө төнәтмәһенә ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ ашарға. Ҡулланыр алдынан яҡшылап болғатырға. Дауаны көсәйтеү өсөн иртән төнәтмәгә сей йомортҡа, көндәҙ һәм кис 1 ҡалаҡ аҡ май менән ҡушып ашарға була.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Йә бер нәмә лә эшләмәйенсә, ассимиляцияға дусар булабыҙ, йә бөтә көстө туплап, телебеҙҙе, башҡортлоғобоҙҙо һаҡлайбыҙ. Беренсе юл еңел, икенсеһе ауыр, әммә беҙ телһеҙ маңҡорт булмаясаҡбыҙ", - тип, бурыстар ҙа билдәләнә.*



*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*

# БАШҠОРТ КЕЙЕҘЕ

**Туй кейеҙе рәтенә түшәй торған тар юрған да инә. Түр юрғаны тип йөрөтөлә ул, оҙон тар һәм ике ҡыҫҡа түшәктән тора. Түр юрғаны торлаҡтың түренә, ашай торған ергә йәйелә. Ҡурған башҡорттарында кейеҙ нигеҙгә эре аппликациялы биҙәктәр тегелгән туҡыма ҡушып тегелә.**

1974 йылда Әлмән районының Шәрип ауылында өс ҡаттан торған биҙәкле түшәк фотоға төшөрөп алынған. Борон түшәк өсөн яҙғы йөндө һуңыраҡ ҡырҡҡандар. Июнь аҙағы-июль башында йөн ятып бөтә, тап ошо мәлдә ҡырҡып алынғаны түшәккә тотонолған. Һарыҡтан тыш, дөйә йөнө ҡулланылған.



*Буй юрған биҙәктәре. Ҡурған өлкәһе.*

Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында түшәктәр бәләкәй өсмөйөш йә квадрат туҡыма киҫәктәренән үҙенсәлекле биҙәктәр һалынған тышлыҡ менән тышланған. Ул ҡорама тип атала. Кейеҙҙең ситтәрен ҡара, ҡыҙыл, йәшел туҡма киҫәге менән ҡаймалағандар, ҡайһы саҡта ҡиммәтле бәрхәт йә буҫтау ҡулланылған.





*Аҡ кейеҙҙәге биҙәктәр. Бөрйән районы Брәтәк ауылы. 1976 йыл.*

"Ҡорама" сәнғәтендә туҡыманы төҫө менән тура килтереү мөһим иҫәпләнгән. Бер төҫтәрәк туҡымаларҙан ромбтар, йондоҙҙар, киртләсле диагональ биҙәктәр, бер-береһенә ҡушылып киткән контраст кәкерсәктәр яһалған. Этнографтар А. Писарчик менән М. Хамиджанова был сәнғәт төрөнә иғтибар итеп, уларҙың бар Урта Азия төбәгендә йәшәгән, бигерәк тә төрки телле халыҡтарға хас булыуын яҙа. Ҡорамаларҙың сәнғәт әйбере булыуынан тыш, үҙенең белдергән мәғәнәһе лә булған. Кейеҙҙең үҙенә һалынған биҙәктәр үҙе һаҡлаусы ролендә булған, уға ҡорамалағы биҙәктәрҙең көсө ҡушылған. Был түшәктәр ашағанда, шулай уҡ йоҡлаған саҡта торлаҡты һаҡлай, тип ышанғандар.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ТУҒАН ТЕЛЕМ!*



**Башҡорт дәүләт университетында Башҡорт АССР-ы ойошторолоуҙың - 100, республиканың иң төп юғары уҡыу йорто асылыуҙың 110 йыллығына арнап, "Башҡортостан Республикаһында һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәрендә башҡорт телен туған һәм дәүләт телдәре булараҡ уҡытыуҙың проблемалары" тип аталған IV Бөтә Рәсәй (халыҡ-ара ҡатнашлыҡтағы) фәнни-методик конференция үтте.**

# ҮҘЕБЕҘҘӘН ТОРА

БДУ ректоры, профессор Николай Морозкин конференцияны асып, башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытҡан, ошо өлкәләге проблемаларҙы ишетеп кенә түгел, күҙмә-күҙ осрашып белгән уҡытыусыларҙың фиҙәкәр хеҙмәте өсөн рәхмәт белдерҙе. Артабан БР Башлығы Хакимиәтенең Ижтимағи-сәйәси үҫеш буйынса идара начальнигы урынбаҫары Ришат Сабитов сараға йыйылыусыларҙы БР Башлығы вазифаһын башҡарыусы Радий Хәбиров исеменән сәләмләп, конференцияла башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙың сифатын күтәреү юлдары, үҫеп килеүсе быуынды тәрбиәләүҙә туған тел, халыҡ педагогикаһы һәм этник традицияларҙың роле, заманса мөхиттә рус-башҡорт һәм башҡорт-рус телдәрендәге үҙ-ара бәйләнештәр мәсьәләләре буйынса сығыштар яңғырарына һәм практик йүнәлештәге ҡарарҙар ҡабул ителеренә ышаныс белдерҙе. Сарала шулай уҡ Йосоп Баласағун исемендәге Ҡырғыҙ милли университеты профессоры Назгөл Турдубаева ҡатнашты һәм тәбрикләү сәләмен еткерҙе. Алға китеп әйткәндә, конференция сиктәрендә ул БДУ ректоры Николай Морозкин менән осрашып, халыҡ-ара вуз бәйләнештәрен үҫтереү перспективалары буйынса фекер алышты.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының баш белгесе Рәйсә Күзбәкованың сығышына айырым иғтибар йүнәлтке килә. Ул быйыл апрелдә башҡорт теле уҡытыусыларының Беренсе республика съезы үтәсәге хаҡында белдерҙе һәм "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль Законға үҙгәрештәр индерелеүе һөҙөмтәһендә туған телдәр һәм республикаларҙың дәүләт телдәренең ата-әсәләрҙең теләге буйынса уҡытылыуына тағы бер тапҡыр иғтибар йүнәлтте. Һәм, иң мөһиме, мәктәптәрҙә биш көнлөк уҡытыуға күсеү мәсьәләһен күтәрҙе. "Һуңғы ике яңылыҡ туған телдәрҙе һәм башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға күпмелер дәрәжәлә кире өлөш индерер тигән хәүеф бар, - тине Рәйсә Абдрахман ҡыҙы. - Биш көнлөк уҡыу системаһына күсеү аҙнаһына дөйөм сәғәттәрҙе өс сәғәткә кәметеүҙе күҙаллай. Ошо хәлдән нисек итеп сығырға һәм башҡорт теле дәрестәренә хилафлыҡ килмәһен өсөн нимә эшләргә мөмкин? Закон сыҡҡан, уны үтәргә кәрәк, шуға күрә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының төп тәҡдимдәренең береһе - ата-әсәләр менән ныҡлы эш алып барыу зарурлығы. Был йәһәттән былтыр Ҡоролтайҙа республика ата-әсәләр комиссияһы ойошторолдо, һәм беҙ тиҫтәләгән районда йыйылыштар үткәрҙек. Рухлы, балаларына башҡорт телен уҡытырға теләгән атай-әсәйҙәр бар, тик улар менән эшләргә, уларҙы берләштерергә генә кәрәк. Ә ата-әсәгә үҙҙәре кеүек үк ата-әсәләрҙән дә көслөрәк тәьҫир итә алған кешене белмәйем". Рәйсә Абдрахман ҡыҙының уҡытыусылар алдында шулай тип сығыш яһауы юҡҡа түгел, сөнки артабан ул залда ултырған уҡытыусыларға урындарҙа рухлы ата-әсәләрҙе йыйыуҙа, бергә туплауҙа ярҙам һорап мөрәжәғәт итте: "Бөгөн бер-ике уҡыусы ла йыя алмаған уҡытыусылар ҙа, шул уҡ ваҡытта ҡала мәктәптәрендә лә башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытҡан кластарға 20-шәр бала, ул ғына ла түгел, сит милләт балаларын да йыйған, үҙ предметын яраттыра алған уҡытыусылар бар. Тимәк, үҙебеҙгә тырышып эшләргә кәрәк. Беҙҙең алда бөгөн ике генә юл - йә бер нәмә лә эшләмәйенсә, ассимиляцияға дусар булабыҙ, йә бөтә көстө туплап, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, башҡортлоғобоҙҙо һаҡлайбыҙ. Беренсе юл еңел, икенсеһе ауыр, әммә беҙ телһеҙ маңҡорт булмаясаҡбыҙ", - тип, бурыстар ҙа билдәләнә.

Әйткәндәй, пленар ултырышта телмәр тотоусы уҡытыусыларҙың үҙ дәрестәрен нисек ойоштороу буйынса күрһәтмә сығыштарында ла был фекер ярылып ятты: барыһы ла үҙебеҙҙән тора!

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

# БЫЛ ОЙОШМА УЛАРҘЫ...

## тыуған яҡтар менән бәйләй

**Башҡортостандың төрлө төбәктәренән баш ҡалаға юғары белем алырға килгән йәштәрҙең үҙенең райондаштары, яҡташтары менән аралашыу өсөн бер төркөмгә берләшеп, төрлө йыйындар ойоштороу йолаһы бар. Тәү ҡарамаҡҡа, был сараларҙың маҡсаты йыл һайын үҙгәргән кеүек булһа ла, ул йәштәрҙең атай нигеҙе урынлашҡан төбәк менән бәйләнештәре өҙөлмәүҙе күҙ уңында тота. Бына шундай быуындар һәм тыуған төйәктәр араһындағы ептәрҙе ялғап торған БР Йәш яҡташтар ассоциацияһының рәсми рәүештә эш башлауына ун йыл тулды. Ойошманың күркәм юбилейы айҡанлы Өфөлә тантаналы сара ойошторолдо.**



✓ **Көньяҡ Башҡортостандың бер ауылында урындағы властар бөтә ир затын, үҫмерҙәрҙе лә ҡалдырмай, ҡулға алып, улыс үҙәгенә килтергән дә, береһен дә ҡалдырмай атып үлтергән. Шундай вәхшилек бөтә ерҙә хөкөм һөргән.**



ХӘТЕРКИТАП

# БАШҠОРТ ДЕЗДЕМОНАҺЫ

**"Ҡабаттан йәнләнгән фотоһүрәттәр" проектының маҡсаты - кинорежиссер Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" тарихи нәфис фильмы геройҙары менән таныштырыу. Фотоларҙың тәүгеһендә - тарихи шәхес үҙе булһа, икенсеһен фильмдың костюмдар буйынса рәссамы Әлиә Байрамғолова кино төшөрөү майҙансығында яһаны. Сираттағы геройыбыҙ - башҡорт театры титандарының береһе. 20 йылға яҡын башҡорт сәхнәһе унан башҡа Дездемонаны белмәй, бындай осраҡ башҡа бер артистың тормошонда ла булмағандыр, моғайын.**





*Зәйтүнә Бикбулатова. Актриса Рушанна Бабич.*

**Зәйтүнә Ислам ҡыҙы БИКБУЛАТОВА** (актриса Рушанна Бабич уйнай). 1928 йылда сәнғәт техникумы студенты Зәйтүнә Бикбулатова "Башҡорт туйы" спектаклендә уйнай. Был ваҡытта башҡорт театрының яңы аяҡҡа баҫып килгән мәле була. Техникумдың тәүге сығарылышы йәш республикаға билдәле сәнғәт эшмәкәрҙәрен бүләк итәсәген бер кемдең уйына ла килмәй әле. СССР-ҙың буласаҡ халыҡ артисы Зәйтүнә Бикбулатова хеҙмәт биографияһын Өфөнөң "Октябрьский натиск" нәшриәтендә башлай. Бер юлы Калинин исемендәге клубта драма сәнғәтен яратыусылар түңәрәгендә шөғөлләнә. Ҡыҙҙың актерлыҡ һәләтенә шунда уҡ иғтибар итәләр һәм ул 1926 йылда Башҡорт сәнғәт техникумына, Вәлиулла Мортазин класына уҡырға инә. Техникумды тамамлағас, үҙенең уҡытыусыһы, режиссер Мәкәрим Мәһәҙиевҡа кейәүгә сыға. 1931 йылда уларҙың улы Лир донъяға килә.



*"Беренсе Республика" фильмынан кадр - З. Бикбулатова фронт бригадаһы составында фронтта сығыш яһай.*

Йәш актрисаның ижади биографияһы иһә ҙур уңыштарҙан башлана. Д. Юлтыйҙың "Ҡарағол", А. Таһировтың "Алатау", А. Островскийҙың "Гәйепһеҙ гәйеплеләр", Ф. Шиллерҙың "Мәкерлек һәм мөхәббәт", А. Пушкиндың "Борис Годунов" спектаклендәге ролдәре уға дан алып килә. 1930 йылда СССР-ҙың сәнғәт олимпиадаһында баш ҡала тәнҡитселәре уны йәш Ермолова менән сағыштыра.

Ун йылға тулмаған бәхетле ғаилә һәм ижади тормош бер көн кеүек үтә. Дәһшәтле 30-сы йылдар етә: 1937 йылда Мәкәрим Мәһәҙиевты, 1938 йылдың йәйендә иһә Зәйтүнә Бикбулатованың үҙен дә ҡулға алалар. Төрмәлә уны һайлау алдына ҡуялар: йә ирендән баш тартаһың, йә уның аяныслы яҙмышын уртаҡлашаһың. Балаһы яҙмышы өсөн борсолған һәр әсә уның урынында ҡалырға теләмәҫ ине, моғайын. Шуға ла ошо шарттарҙа ҡалып, рухи һынылыш кисергәндән һуң, уларҙың яңауҙарға ышаныуҙарын да, ҡурҡыуҙарын да, үҙ хеҙмәттәштәре өҫтөнән ялыуҙар яҙыуын да, гәйепләүсе докладтар менән сығыш яһауҙарын да аңлап ҡабул итергә тейешбеҙ. Дөрөҫөрәге, уларҙы гәйепләргә беҙҙең хоҡуғыбыҙ ҙа юҡ. Төрмәлә ярты йыл ултырып сыҡҡандан һуң, Зәйтүнә Бикбулатова шартлы рәүештә хөкөм ителеү срогын тултырыу өсөн тыуған яҡтарына ҡайтарыла, төҙәлөштә эшләй. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, спектаклдәрҙә ҡумаҡ сәхнәләрҙә, фронтҡа китеп барған һалдаттар, госпиталдәге яралылар өсөн концерттарҙа ҡатнаша башлай. 1942 йылдың көҙөндә фронт концерт бригадаһы составында Сталинградҡа китә һәм 6 ай фронтта була. Өфөгә ҡайтҡас, 1943 йылдың 14 апрелендә Зәйтүнә Бикбулатованан хөкөм ителгәнлек алына. Ул яңынан Башҡорт академия драма театры труппаһына инә.

**Гөлнара ЯРУЛЛИНА,**
**тарих фәндәре кандидаты,**
**проект авторы.**

---

Байрам уңайынан үткәрелгән саралар теҙмәһенең тәүгеһендә - түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар йәштәрҙең республиканан ситкә китеүе, йәш белгестәрҙе ауылға эшкә йәлеп итеү, район етәкселеге һәм әүҙем йәштәр араһында хеҙмәттәшлекте яйға һалыу, йәштәрҙең белем кимәлен күтәреү мәсьәләләре буйынса фекер алышты. "Ҡала мөхитендә үҫмәгән йәштәр башҡа йәмәғәт ойошмалары өсөн ябыҡ, уларға яҡынайыу юлын табыуы ауыр. Әммә "районлаштар" тигән принцип ябыҡ берләшмәләрҙе лә аса ала. Яҡташтар ассоциацияһы идеяһына БР Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров та ыңғай ҡараштa, был ойошма уның халыҡҡа мөрәжәғәтендә сағылған маҡсаттарға ярашлы эшләй. Шуға бөгөнгө түңәрәк ҡорҙағы фекер алышыу һөҙөмтәһе ассоциацияның үҫешенә яңы йүнәлеш бирер, тип ышанам", - тине ултырышты асып БР Башлығы Хакимиәтенең Иждимағи-сәйәси үҫеш буйынса идара начальнигы урынбаҫары Азат Бадранов. РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров район хакимиәте башлыҡтарына, депутаттарға һәм башҡа дәүләт органдарына ярҙам һорап килгәндә аныҡ тәҡдимдәр менән мөрәжәғәт итергә һәм әүҙемерәк булырға кәңәш итте. "Йәштәргә ҡағылышлы закон проекттары ҡабул ителһенме, уҡыу йортонда бюджет урындары ҡыҫҡартылһынмы - шымып ҡалмағыҙ, фекер алышығыҙ, үҙ мөнәсәбәтегеҙҙе белдерегеҙ", - тине Зариф Закир улы.

Түңәрәк ҡорҙоң эше тамамланғас, йәштәр тауышынан шау-гөр килеп торған фойела күргәҙмәләр менән таныштыҡ. Унда Баймаҡ, Мәсетле, Краснокама, Күгәрсен, Белорет, Йылайыр, Ғафури, Әбйәлил, Дүртөйлө, Федоровка, Архангел, Балаҡатай, Ишембай, Хәйбулла, Бөрйән, Учалы һәм Ейәнсура райондарының үҙенсәлектәрен сағылдырған, йолаһы һәм ашһыуы, тәбиғәте менән таныштырған күргәҙмәләр урын алғайны. Артабан юбилей тантанаһы шығырым тулы залда дауам итте. БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың сәләмен уҡып ишеттерҙе һәм әүҙем йәштәргә министрлыҡ исеменән рәхмәт хаттары тапшырҙы. Талантлы студенттарҙың үҙ көсө менән әҙерләгән концерт программаһы һәр кемдең күңеленә ятты, ә инде видеотаҫма рәүешендә күрһәтелгән ойошманың тарихы, иҫтәлекле фотолар ҡасандыр ошо эштә әүҙем ҡатнашҡан оло быуын кешеләренең хәтирәләрен яңыртып ебәрҙе. "Беҙҙең заманда яҡташтар осрашыуы һәр саҡ ҡумаҡлап фотоға төшөүҙән һәм аҙаҡтан ресторанға барыуҙан ғибәрәт булды, ә бөгөнгө йәштәр быңа ниндәй бөйөк маҡсаттар менән янып йөрөй!" - тип һөкланыуын белдерҙе күптәр. "Әбйәлил йәштәре берлеген 2002 йылда яңы форматта эшләргә күсереп, ун икеләп район йәштәре менән "Ете ырыу" тип ойошоп, уртаҡ саралар уҙғара башланыҡ, - ти Әбйәлил йәштәре берлегенең элекке рәйесе Марат Абдуллин. - Төүмаҡсат итеп йәштәрҙе үҙ-ара таныштырыу, хәмерһеҙ аралашыу, рухи тәрбиә бирерлек сараларҙы даими рәүештә үткәреү ине. Комсомол кеүек ойошмалар юҡҡа сыҡҡас, яңы ойошма ауылдан килгән баҙнатһыҙ йәштәргә лидерлыҡ һәләттәрен үҫтерергә булышлыҡ итте. 16 йылдан һуң алмашҡа килгән йәштәр ошондай уңыштарға өлгәшә алған икән - тырышлығыбыҙ бушҡа булмаған. Киләсәктә лә йәштәрҙең уңыштарына ҡыуанып торорға яҙһын".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**БР Йәш яҡташтар ассоциацияһы бөгөнгө йәштәрҙең кемдәндер нимәлер талап итеү урынына, киләсәгендә үҙ ҡулдарың менән төҙөргә кәрәк, тигән ышаныһын сағылдырған ойошма. Шуға ла ул меңәрләгән йәш кешенең күңелендә рух уята, мәғрифәтселек идеяларын тарата, донъяның ҡайһы тарафында ла тыуған төйәге тураһында борсолорға, халҡы мәнфәғәтен уйларға һәм иң мөһиме - изге ниәтте дөрөҫ эш менән иҫбатларға өйрәтә. Киләсәктә был мәктәп тағы ла күберәк яҡташтарҙы бер урынға берләштерер һәм йәштәрҙең ташып торған дәрт-дәрманын тик файҙаға йүнәлткән эшмәкәрлеген дауам итер, тигән ышаныс бар.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

---

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



*Әкрәм БЕЙЕШ*

# БАШҠОРТ АВТОНОМИЯҺЫ ӨСӨН КӨРӘШ БАШЫНДА

Колонизаторҙарҙың һәм совет власының башҡортҡа ҡаршы йүнәлтелгән эше милли хөкүмәт органдарын эҙәрлекләү менән генә бөтмәгән. 1917 йылдың ноябренән башлап, улар башҡорт халҡын аяуһыҙ ҡыра башлаған. Башҡорт хөкүмәте ҡулға алынғас, был террор бигерәк тә ныҡ көсәйгән. Ҡыҙыл ғәскәрҙәр ҡарап тормай, зыялыларҙы, ябай һәм етәксе башҡорт эшмәкәрҙәрен, ғөмүмән, бер эшкә лә ҡыҫылмаған башҡортто һыпырып атҡан, башҡорт ауылдарын талаған. Килмешәк халыҡ, башлыса рустар, ҡулында булған улыс һәм ауыл советтары ҡотороп шашҡан. Рус, татар, сыуаш һәм башҡа күскенсе крәҫтиәндәр башҡорттоң милли хәрәкәтенән үҙ мәнфәғәтенә хәүеф күреп, талап йыйған байлыҡтарын һаҡларға, ул ғына түгел, башҡортто бөтөрөп, ҡалған-боҫҡан бөтә ерен баҫып алырға ярһып киткән. Шул маҡсат менән улар ҡыҙыл бандаларға яҙылып, ҡорал алған һәм совет власы исеменән башҡортто ҡырған. Улар башҡортто өйөндә лә, урамда ла, юлда ла - ҡайҙа тап килә, - шунда үлтергән, тотош өй эсе, ауылы менән юҡ иткән. Мәҫәлән, Көньяҡ Башҡортостандың бер ауылында урындағы властар бөтә ир затын, үҫмерҙәрҙе лә ҡалдырмай, ҡулға алып, ҡамсы менән ярып, улыс үҙәгенә килтергән дә, береһен дә ҡалдырмай атып үлтергән. Шундай вәхшилек бөтә ерҙә хөкөм һөргән. Ҡумаҡ террор менән бер ыңғай халыҡты талағандар, ерҙәрен баҫып алғандар, урмандарын ҡырҡҡандар. Ҡаршылыҡ күрһәткән ауылдарға Ҡыҙыл гвардияның карател отрядтары ебәрелгән. Улар аяуһыҙ ҡан ҡойоп, халыҡтың ҡотон алған, көс етмәҫ контрибуция һалған. Башҡорт телендә "урыҫ азатлығы" тип исем алған революция колонизаторҙарҙың йырткыс инстинктына тулы ирек биргән, төп башҡорт халҡын бөтөнләй хоҡуҡһыҙ иткән. Өфө һәм Ырымбур губерналарының үҙәк партия һәм совет органдары башҡорт ерен тартып алып, "эшсән" рус крәҫтиәндәренә биреүҙе үҙҙәренең төп бурысына һанаған, шуның өсөн террорҙы яҡлаған, үҙҙәре лә туранан-тура уға ҡатнашлыҡ иткән. Ҡыҙыл ғәскәрҙең һәм совет органдарының ҡанлы эше большевиктарҙан яҡшылыҡ булмаясына башҡортто тамам ышандырған. Улар большевиктарҙың батша ваҡытында төрлө ҡанһыҙлыҡ ҡылған карателдәрҙән бер ҙә кәм түгел икәнен, башҡортҡа хас дошман икәнен күргән. Хатта совет органдарында эшләп йөрөгән башҡорттар ҙа, берәм-һәрәмдән башҡаһы, үҙ урынын ташлап, большевиктар менән мөнәсәбәтен өҙгән.

(Дауамы бар).

*✓ Әгәр ҙә был ауылдарға Бикәтүндең улдары нигеҙ һалған, тип иҫәпләгәндә, ул ауылдарҙа ла башҡорттарҙың тоҡомдары йәшәй, тип фаразларға була. Шулай уҡ Йүрме - боронғо башҡорт ҡәбиләһе булараҡ билдәле.*

## Себерҙәге
# ТАМЫРҘАРЫН

**Себер тарафтарында башҡорттар күп йәшәй. Ваҡытлыса эшкә китеүселәр ҙә, бөтөнләйгә йәшәргә күсеп барыусылар ҙа, репрессия йылдарында ебәрелгәндәрҙең балалары ла иҫәпһеҙ-һанһыҙ. Ә бына Түмән өлкәһе Вағай районында урынлашҡан Бегетино ауылына әллә күпме быуат элек ҡатай һәм үҫәргән ырыуҙары составына ингән бәкәтин башҡорт ырыуы кешеләре нигеҙ һалыуын күптәр белмәйҙер. Ошо хаҡта киң йәмәғәтселек иғтибарына еткереүсе, үҙҙәрен себер татарҙары тип йөрөткән ауылдаштарының шәжәрәһен, ауылының тарихын өйрәнеп, "Бегетино ауылы тарихы" исемле китап сығарыусы Фәрхәд ШАМУРАДОВ менән бәйләнешкә сыҡтыҡ.**

**"Бегетино ауылы тарихы" китабын сығарыу уйы нисек барлыҡҡа килде?**

- Тарихсы булмаһам да, студент йылдарында уҡ үҙемдең ата-бабаларымдың кем икәнен белеү теләге тыуҙы һәм мин яйлап тарихыбыҙҙы өйрәнә башланым. Ләкин кәрәкле мәғлүмәтте таба алмауым, шулай уҡ эҙләнеүҙәрҙе ни рәүешле алып барырға кәрәклеген аңламауым арҡаһында был эште бер нисә йылға ҡалдырып торорға тура килде. 2015 йылда, ниһайәт, эҙләнеүҙәргә кире тотондом. Тобольск һәм Өфө ҡалалары архивтарында булдым.

Шәжәрәмде төҙөү өсөн архивтарҙа ултырғанда ауылыма ҡағылышлы материалдарҙың күп булыуы ла күҙгә салынды. Мин уларҙы ла теркәп барҙым, күсермәләрен эшләнем, ғөмүмән, шәжәрәм менән бер рәттән, ауылым тарихын асыҡлауға ла тотондом. Барыһы ла архивта ултыра алмай, ә кешеләргә еткерәһе тарихи мәғлүмәт шул тиклем күп һәм ҡыҙыҡ ине. Шуға күрә ауылымдың тарихы тураһында китап сығарырға ҡарар иттем.

Ике йыл материал туплағас, 2017 йыл аҙағында уларҙың барыһын да системалаштырып, китаптың структураһын, планын төҙөп, фотоһүрәттәр эҙләп табып бөткәндән һуң, китапты баҫыуға тапшырҙым. Уҙған йылдың 20 ноябрендә "Бегетин ауылы тарихы" китабын ҡулыма алдым. Китап 100 данала үҙ иҫәбемә баҫылды һәм ул 388 биттән тора. Китапҡа ауылда йәшәүсе 38 ғаиләнең шәжәрәһе һәм ауылға ҡағылышлы архив материалдары, фотолар ингән. Әлбиттә, китаптағы мәғлүмәттәр ауылдың тотош тарихы тураһында һөйләй, тип әйтә алмайым, өйрәнәһе һәм асыҡлайһы моменттар күп. Ләкин китап тарихи факттарҙы артабан асыҡлауға нигеҙ булып торор, тип уйлайым.

Шәжәрәмә килгәндә, ул үҙенә 10 быуынды ала һәм 1670 йылда тыуған Ҡормашҡа барып бәйләнә. Ваҡыт табып, ниәт итеп, унан алдағы быуындарым тураһында ла мәғлүмәт эҙләп табырмын, тип уйлайым. Эҙләнеүҙәр барышында өләсәйем Рәхимә Имәнғолованың һуғышта хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнгән ағаһы Уразмөхәмәт Колчаковтың эҙенә барып сыҡтым. Ул Сталинград өсөн һуғышта һәләк булған икән.

**Был эҙләнеүҙәр барышында һин ауылыңа бәкәтин ырыуы башҡорттары нигеҙ һалған, тигән һығымтаға килгәнһең, шулаймы?**

- Мин тапҡан документтар араһында беҙҙең ауыл тарихына асыҡлыҡ индергән иң тәүге документ - С.У.Ремезовтың 1697 йылда төҙөлгән Хорографик һыҙма картаһы. Карта 1687 йыл мәғлүмәттәренә таянып эшләнгән. Шулай итеп, Бегетин ауылы 1687 йылдарҙа әүҙем үҫешкән ауыл булған. Ә ололар әйтеүенсә, ауылға нигеҙ, яҡынса, 1580-1590 йылдарҙа һалынған.

Тарихҡа күҙ һалғанда, бәкәтин ырыуы башҡорттары Себер тарафтарына Күсем хан менән килгән. Ә Себер ханлығы тарҡалғас, уларҙың ниндәйҙер өлөшө Көнбайыш Себер биләмәһендә ҡалған. Беҙҙең ауылға ла нәҡ бәкәтин ырыуы башҡорттары нигеҙ һалғандыр, тип фаразлайым.

Әлбиттә, был етди эҙләнеүҙәр, ғалимдар тарафынан өйрәнеүҙе көткән тема һәм минең китабым ошондай эҙләнеүҙәргә этәргес көс булыр, тип ышанам. Шулай уҡ генетик тикшереүҙәр үткәреү кәрәк, тип һанайым һәм артабанғы эшмәкәрлегемдә ошо юҫыҡта алып барасаҡмын.

Әйткәндәй, Себер татарҙары тураһында күп өйрәнгән һәм ғилми хеҙмәттәр баҫтырған профессорҙар Диләрә Тумашева һәм Фоат Вәлиев тә "Бегетино"ның башҡорт этнонимынан килеп сығыуын билдәләй. Ваҡыт үтеү менән улар үҙҙәренең башҡорт булараҡ үҙенсәлектәрен юғалтып, урындағы халыҡтар менән ҡушылып, улар менән оҡшашып, Себер татарҙары исеме аҫтында йәшәй башлаған.

Википедия мәғлүмәттәренә таянып һүҙ йөрөткәндә, бәкәтин ырыуы Бикәтүндән башланған. Уның атаһы иһә башҡорт халҡына исем биреүсе Иштәк. Ә Бикәтүндең улдары Байлар һәм Йүрми булған. Әйткәндәй, беҙҙең районда Иштәк (Истятское) һәм Йүрме (Юрмы) ауылдары бар. Шуға күрә, әгәр ҙә был ауылдарға Бикәтүндең улдары нигеҙ һалған, тип иҫәпләгәндә, ул ауылдарҙа ла башҡорттарҙың тоҡомдары йәшәй, тип фаразларға була. Шулай уҡ Йүрме - боронғо башҡорт ҡәбиләһе булараҡ билдәле. Ләкин төплө өйрәнмәйенсә быны раҫлау, ғөмүмән, тарихта бер нәмәне лә, әгәр ҙә документаль нигеҙҙә ныҡлы билдәләнмәһә, "нәҡ шулай булған", тип әйтеүҙән һаҡ булыу кәрәк.

**Себер татарҙары менән Ҡаҙан татарҙары араһында ниндәйҙер дөйөм уртаҡлыҡ бармы?**

- Элекке ваҡытта Себерҙә йәшәгән бөтә төрки ҡәбиләләрҙе "татар" исеме менән йөрөткәндәр. Ҡытайҙар шулай уҡ уларҙы "нуғайҙар", тип тә атаған. Шуға күрә, әгәр ҙә тарих икенсе төрлө юлдан китһә, беҙ бөгөн, бәлки, Себер нуғайҙары, тип тә йөрөтөлөргә мөмкин инек. Тарих шул тиклем ҡатмарлы әйбер, күпме өйрәнһәң дә тулыһынса осона сығып етеп булмай. Ҡаҙан татарҙары менән беҙҙең уртаҡлыҡ шунда - беҙ барыбыҙ ҙа төрки халыҡтарға инәбеҙ. Ә генетик тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Ҡаҙан, Ҡырым, Себер һәм Әстерхан татарҙары төрлө халыҡтар вәкиле. Уларҙың дөйөм ата-бабалары юҡ һәм уларҙың халыҡ булып формалашыуы бер береһенән бойондороҡһоҙ рәүештә барған. Ошо факт ни өсөн уларҙың телдәре бер-береһенә оҡшамағанын һәм ниңә улар бер-береһен аңламауына асыҡлыҡ индерә.

Шуға күрә, бөгөнгө көндә Себер татарҙарын Ҡаҙан йәки Ҡырым татарҙарына индерергә тырышыу бөтөнләй башҡа һыймай. Беҙ үҙаллы халыҡ. Беҙҙең үҙ телебеҙ, сәнғәтебеҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, быуаттар буйы формалашҡан үҙ булмышыбыҙ бар. Әлеге ваҡытта беҙ айырым халыҡ булып көн итәбеҙ. Беҙҙең өсөн иң мөһиме - "себер халыҡ" булыуыбыҙ. Икенсе төрлө әйткәндә - сыбырлар.

Эйе, беҙҙә Ҡаҙан тарафынан бағыусылыҡ ярҙамы алған йәмәғәт ойошмалары бар. Улар, бәлки, үҙҙәрен Ҡаҙан татарҙары менән бер итеп күрәләр, ләкин беҙҙең ике төрлө халыҡ булыуыбыҙҙы онотторға ярамай. Әлеге ваҡытта Себер татарҙарының һаны яҡынса 200 мең тирәһе иҫәпләнә. Милли мәктәптәрҙә Ҡаҙан татарҙарының әҙәби теле уҡытыла, тик был дөрөҫ түгел, сөнки беҙҙең үҙебеҙҙең матур, бай телебеҙ бар.

**Үҙебеҙҙең телдә, тиһең. Ә ниндәй тел ул?**

- Беҙҙең телебеҙ - сыбыр теле (сибиротатарский), йәғни башҡортсаға әйләндергәндә - себер теле. Ул төрки телдәре ҡыпсаҡ төркөмөнөң ҡыпсаҡ-нуғай төркөмсәһенә инә. Беҙҙең үҙ алфавитыбыҙ бар. Ул Себер алфавиты тип атала һәм 39 хәрефтән тора. Унда башҡорт алфавитындағы кеүек үк, Ә, Ғ, Ҡ, Ң, Ө, Ү хәрефтәре бар, ләкин Ç һәм Ҙ өндәре юҡ. Шулай итеп, Себер татарҙары һаналһаҡ та, беҙҙең алфавитыбыҙ, һөйләшеүебеҙ һәм яҙмабыҙ башҡорттарҙыҡына ныҡ оҡшаған. Беҙгә, мәҫәлән, Татарстан татарҙары теленә ҡарағанда башҡорттоҡон аңлауы күпкә еңел. Яҙмаларға килгәндә лә шул уҡ хәл, тип уйлайым. Бына, мәҫәлән, "Пәйрәм пескә килә" тигәндә, һеҙ өйрәнгән Б хәрефе урынына П ҡуйылһа ла, барыһы ла аңлашылып тора, шулай бит?

Телебеҙ рәсми теркәлеү үткән, ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, бөгөнгө көндә ул ЮНЕСКО тарафынан юғалыу ҡурҡынысы янаған телдәр исемлегенә индерелгән. Был телдә ауылдарҙа ғына һөйләшәләр, ә ҡалала аралашыу тик урыҫ телендә генә бара.

**Ошо тиклем ҙур тарихи эш атҡарып сыҡҡан егет тураһында тулыраҡ мәғлүмәт белергә ине...**

- Мин Силәбе ҡалаһында тыуһам да, 2 йәшемдән Бегетин ауылында үҫтем. Урта мәктәпте тамамлағас, Машиналар төҙөү техникумында уҡыным. Унан Түмән дәүләт нефть һәм газ университетында белем алдым һәм Түмән индустриаль университетының магистратураһын тамамланым. Һәм шунда уҡ 2016 йылда "Урта профессиональ һәм өҫтәмә белем биреү уҡытыусыһы" программаһын үҙләштерҙем. Шулай итеп, техник, инженер, магистр һәм өҫтәмә белем биреү уҡытыусыһы һөнәрҙәренә эйәмен. Әлеге мәлдә "Быраулау технологияһы һәм скважиналарҙы үҙләштереү" һөнәре буйынса аспирантурала белем алам.

Һигеҙ йыл Түмән дәүләт газ һәм нефть университетында махсус дисциплиналарҙан студенттарға белем бирҙем. Бөгөнгө көндә "Запсибэнерго" белем биреү үҙәгендә уҡытам. Беҙҙә нефть һәм газ өлкәһендә эшләүселәр өҫтәмә профессиональ белем ала. 2013 һәм 2015 йылдарҙа "Түмән өлкәһе йыл уҡытыусыһы" һөнәри оҫталыҡ конкурсының "Йыл оҫтаһы" номинацияһы призеры булдым. Фәнни-практик конференция йыйынтыҡтарында, Рәсәй ғалимдарының фәнни эштәре баҫылған библиографик базала (РИНЦ) баҫылған 30-ҙан ашыу мәҡәлә авторымын. Шулай уҡ бер мәҡәләм Юғары аттестация комиссияһының махсус журналында баҫылды. Нефть скважиналарын быраулау өсөн тәғәйенләнгән махсус прибор - долота инструментының - көсөргәнешлеген үлсәүгә авторҙашлыҡ-



Түмән өлкәһе Вағай районы Бегетино ауылы.

***✓ Байрамдарҙа сепрәк-сапраҡ өләшкәнсе, китаптар бүләк итешәбеҙ. Уҡымлы, йөкмәткеле китаптар һайлап алабыҙ ҙа, бер-беребеҙҙе ҡыуандырабыҙ. Шулай уҡ гәзиттәргә яҙҙырып бүләк итешеү ғәҙәтебеҙ ҙә бар.***



та патентым бар. 2010-2011 йылдарҙа армия сафында хеҙмәт иттем.

**Уҡыуға ынтылышың бала саҡтан шулай көслө булдымы?**

- Эйе, мәктәптә лә яҡшы уҡыным. Миңә һәр саҡ яңы нимәлер белеү, яңынан-яңы өлкәләрҙе үҙләштереү оҡшай. Мине әсәйем һәм өләсәйем тәрбиәләне. Улар һәр ваҡыт миңә белемдең ниндәй ҙур көскә эйә булыуын һөйләне, белемле кешенең бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмаясағын аңлатты. Миңә юғары белем алырға һәм тормошта үҙ урынымды табырға ярҙам итеүҙәре өсөн уларға оло рәхмәтлемен. Әле булһа, улар һәр башланғысымды хуплап, үҙҙәренең кәңәштәрен биреп, изге фатихаларын юллап торалар. Артабан тағы ла бер нисә һөнәр үҙләштерергә иҫәбем бар. Тарих һәм юридик йүнәлеш буйынса белем алырға һәм ғәрәп графикаһына өйрәнергә уйлайым. Күптән түгел сыбыр телендә шиғырҙар яҙа башланым. Кем белә, бәлки, киләсәктә филологияны ла "йүгәнләрмен" әле. Маҡсат ҡуя белгәндә һәм тырышҡанда барыһына ла өлгәшергә була.

**Бегетин ауылы халҡы бөгөнгө көндә нисек йәшәй?**

- Ауылда әлеге мәлдә 54 йорт. Күберәген оло быуын кешеләре ғүмер итә, шулай уҡ ҡалала йәшәп, хаҡлы ялға сыҡҡандар ауылға ҡайтып йорттар күтәрә. Йәштәр иһә күберәк Тобольск йәки Төмәнгә китә. Элек ауылда мәктәп булды, ләкин ул ябылды. Мин 3 кластан 2,5 саҡрым алыҫлыҡта яткан Первомайский ауылына йөрөп уҡыным. Клуб шулай уҡ бикле тора. Медицина ярҙамы артынан да күрше ауылға барырға тура килә. Унын ҡарауы, беҙҙең мәсетебеҙ бар. Ауылдың бәләкәйлеге һәм социаль объекттарҙың булмауы, тәбиғи, эшһеҙлек тыуҙыра. Халыҡ йәйкөҙ айҙарында күк, ҡара, ҡыҙыл көртмәле, ҡайын еләге, ҡара һәм ҡыҙыл ҡарағат, бәшмәк йыйып, ауыл эргәһенән үткән федераль трассаға сығарып һатып аҡса эшләй. Шулай уҡ беҙҙең яҡта балыҡҡа бай күлдәр күп. Балыҡсылыҡ та ауыл халҡына аҡса эшләргә ярҙам итә.

**Эҙләнеүҙәрең барышында Өфөгә лә килгәнһең. Башҡортостандың баш ҡалаһы, уның халҡы һиндә ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы?**

- Өфөгә мин Ырымбур Мөхәммәдин дини йыйылышының (Оренбургское Мухаммеданское духовное собрание - ОМДС) документтары менән танышырға барҙым. Унда ҡыҙыҡлы хәл булды. Бер нисә көн эҙләп тә, үҙемә кәрәкле документтарҙы тапмайынса, инде ҡайтырға тип архивтың тупһаһына сығып торҙом. Шул ваҡыт артымдан архивта эшләүсе бер егет сығып, миңә ярҙам итергә теләүен белдерҙе. Баҡтиһәң, ул минең эҙләнеүҙәрем тураһында интернет селтәрендәге яҙмалар аша хәбәрҙар булған. Ул үҙе башҡорт ырыуҙары тураһында мәғлүмәттәр туплау өҫтөндә эшләй ине. Уның ярҙамы менән барыһын да табып өйрәнеп ҡайттым. Миңә ярҙам итеүсе егеттән алып ҡарағанда ла, Өфөлә киң күңелле, ярҙамсыл халыҡ йәшәгәнен аңларға була. Ғөмүмән, Өфөлә кешеләрҙең асыҡ сырайлы, дуҫтарса мөнәсәбәттә булыуы күңелгә һеңеп ҡалды. Бөтә ерҙә лә һораўҙарыма ихлас яуап бирҙеләр. Бер сауҙа үҙәгендә студенттарҙың ниндәйҙер байрамына тура килеп, хатта унда ҡатнашып та киттем. Уларҙың берәүһе миңә ҡурай күрһәтте. Шулай уҡ ҡымыҙ менән һыйланылар.

Өфө оҙонлоҡҡа һуҙылған ҡала булыуы менән иҫтә ҡалды. Мин ноябрь айында барҙым. Төмәндә ул ваҡытта һыуыҡ, ҡар яуған ине. Мин Өфөләге һауа торошон ҡарамайынса, ҡалын курткала килеп төшһәм, унда көн йылы, тирә-яҡ әле булһа йәшел ине. Шулай итеп, ҡышҡы кейемдә йөрөп ҡайттым. Ғөмүмән, ағастарҙың күп булыуы, ҙур-ҙур парктар барлығы хайран итте.

**"Башҡорттарға Төмәндән ҡайнар сәләм" тигәнде сыбыр телендә яҙ әле.**

- Башҡортларға Төмәннән ҡайнар сәләм!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай энтузиаст егет менән танышырға насип булды. Ҡайһы берәүҙәрҙең өс быуынын да белмәгәнлеген, халҡының үткәненә битараф булыуын иҫәпкә алғанда, алыҫ Төмәндән үҙ тамырҙарын барлау өсөн хатта Өфөгә килеп ҡайтыусы Фәрхәдкә һоҡланмау мөмкин түгел. Тап уның кеүек битарафлыҡтан азат булған егеттәрҙе "донъя тотҡаһы" тип әйтәләр ҙә инде. Уға артабанғы эҙләнеүҙәренең уңышлы булыуын, бөтә ниәттәренең дә тормошҡа ашыуын теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

***ФӘРХӘД ШАМУРАДОВ:***

*Бөгөнгө көндә Себер татарҙарын Ҡаҙан йәки Ҡырым татарҙарына индерергә тырышыу бөтөнләй башҡа һыймай. Беҙ үҙаллы халыҡ. Беҙҙең үҙ телебеҙ, сәнғәтебеҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, быуаттар буйы формалашҡан үҙ булмышыбыҙ бар.*



# ЮЛЛАЙ...

**сыбырҙар**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*



# КИТАП БҮЛӘК ИТЕШӘЙЕК

**Утыҙ йыл китапханасы булып эшләнем. Хәҙер инде күптән хаҡлы ялда. Китаптарҙың ниндәйен генә уҡыманым да, кемдәрҙе генә өгөтләп китап уҡыусы итмәнем икән был дәүерҙә!**

"Кеше хәҙер китап уҡымай", тигән һүҙ буш ул. Уҡый халыҡ китапты. Бары уҡырлыҡ, уҡыу теләген уятырлыҡ китаптар ғына булһын. Ә бит һәр китапты уҡығы килмәй. Әҫәр башынан уҡ һине "йотһон", эсенә һөйрәп алып инеп китһен ул. Уҡыусыны бит алдап булмай. Бигерәк тә хәҙерге, мәғлүмәт-фәләнгә ҡытлыҡ кисермәгән заман уҡыусыһын.

Үҙемде белгәндән алып ҡулымда китап булды. Атайым уҡымышлы кеше булып, йөрөгән еренән китаптар алып ҡайтты. Кисен электр уты һүндерелгәндән һуң да шәм яҡтыһында китап уҡып ята торғайным. Шулай бала саҡтан әҙәбиәткә ғашиҡ булып үҫтем. Атайыма мәңге рәхмәтлемен, донъяны китап аша аңлата белде (үҙе 45 йәштә генә баҡыйлыҡҡа күсте, йәне йәннәттә булһын). Үҙем дә балаларымды китапҡа яҡын итеп тәрбиәләргә тырыштым.

Китапханала эшләгәс, беләм: кәштәләр тулып торған китаптарҙың өстән бер өлөшө генә уҡымлы әҙәбиәт була. Әле лә шкаф-шкаф булып оло яҙыусыларҙың томлыҡтары, иҫтәлектәре, боронғоларын ҡабат-ҡабат баҫтырғандары тора. Бынан нисә йыл элек нисек торған, әле лә шулай тора улар. Хатта биттәре бер ҡабат асылып та ҡаралмаған килеш торғандары ла бар. Китап нәшриәте ни өсөн былдай йүнәлештә эшләйҙер - аптырайым. Үҙенә лә, уҡыусыға ла бер файҙаһы булмаған китаптарға аҡса түгеү аҡыллы эш микән ни ул?

Шул уҡ ваҡытта уҡымлы китаптарҙы элек тә таба алмай йонсоноҡ, әле лә шулай. Хәтеремдә, Гөлсирә Ғиззәтуллинаның "Тормош шау сәскәлә"һен халыҡ сиратҡа яҙылып уҡыны. 1200 кешелек ауылда теге китапты юғалтмай, ҡулдан-ҡулға йөрөттөк. Таңсулпан Ғарипованың китаптары үтемле булды, әле уның халыҡ яҙыусыһы булғанына ҡыуанып ултырам, ул - лайыҡ. Гөлнур Яҡупова, Лира Яҡшыбаева, Диләүшә Булгакова, Зифа Ҡадырова, Миләүшә Ҡаһармановаларҙың китаптарын да шулай уҡ эҙләп алып, бер-беребеҙгә ҡәҙерләп тапшырып йөрөтөп уҡыныҡ, аяттарҙа йыйылғанда шул турала һөйләштек, фекерләштек. Шағирҙарҙан Рәмил Йәнбәк, Салауат Әбүзәр, Мөнир Ҡунафин, Рамай Ҡаһир, Тамара Ғәниеваларҙың китаптарын һәр саҡ өҫтәлдә тотам.

Ә эшләү дәүерендә күпме шиғырҙарҙы сәхнәнән уҡыным мин! Кеше үҙе тота килеп шиғырҙы уҡымаһа ла, уҡығанды тыңларға бик ярата. Шунлыҡтан, уларҙы шиғыр тыңлауҙан мәхрүм итмәҫкә кәрәк. Кисәләрҙән һуң килеп: "Апай, ҡайҙан алдығыҙ был шиғырҙы?" - тип һорайҙар ҙа, мин китап кәштәһенә күрһәтә инем. Хәҙерге көндә үҙем Бөрйән һылыуы Айһылыу Ғарифуллинаның китабы сығыуын көтөп йәшәйем. Мәрхәмәтле кешеләргә, эшҡыуарҙарға, бөрйәндәргә мөрәжәғәт итәм: шундай һәләтле шағирәнең китабын сығарырға ярҙам итегеҙ! Юғалтмайыҡсы шундай хазинаны.

Һәм тағы ла бер теләгем бар: әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә китап бүләк итәйек. Беҙ Таулыҡай ауылында шул йоланы башланыҡ. Аяттарҙа йөрөшкән ҡатын-ҡыҙ байрамдарҙа сепрәк-сапраҡ өләшкәнсе, китаптар бүләк итешәбеҙ. Уҡымлы, йөкмәткеле китаптар һайлап алабыҙ ҙа, бер-беребеҙҙе ҡыуандырабыҙ. Шулай уҡ гәзиттәргә яҙҙырып бүләк итешеү ғәҙәтебеҙ ҙә бар.

Әле "Биҙәктәр" исемле йыйынтыҡты табып алдым. 550 битенең һәр береһенә матур биҙәк һалынған китапҡа ҡыуанып бөтә алмайым. Ундағы 10 авторҙың һәр береһенең ҡулын ҡыҫып, рәхмәт әйткем килә. Ижад ҡомарҙары артабан да урғып торһон йәштәрҙең.

**Заһира ИСХАҠОВА.**
**Баймаҡ районы Таулыҡай ауылы.**

*✓ Түҙмәне Федя. Һикереп тороп, тегенең эйәге аҫтына берҙе тондорҙо. Башҡортто кәмһеткән герой бер-ике метрға осоп барып төштө лә тын ҡалды. Көс бар икән үҙендә. Күптән был йоҙроҡто эшкә еккән булмағас...*






Уазиктың арт яғында тимер рәшәткәле тәҙрәнән Фәнил тирә-яҡты ҡарап барҙы. Юл саңы ишек ярыҡтарынан инеп, сөскөртһә лә, ташлы юл бер туҡтауһыҙ һикертеп эсәк-бауырҙы ҡуҙғалтһа ла, уға нишләптер күңелле ине. "Ҡасан ауылдан сығып былай йөрөп киләм әле. Бушлай ғына. Тик йөрөтөрҙәрме икән? Бушлаймы?" - тип йылмайҙы. Берәй әмәле килеп сығыр әле. Олатаһы изге кеше ине, уның рухы шул тиклем ауырлыҡтар һалырға юл ҡуймаҫ ейәне иңенә, тип үҙен тынысландырҙы. Был фанилыҡтағы ауырлыҡтар ысын донъяла ожмахҡа үтер өсөн билет кенә ул, тип әйтә торғайны. Ауырлыҡтар, тигәне ошомо икән ни? Беҙҙең бөгөнгө ауырлыҡтар улар быуынына төшкән ҡайғы алдында бөтөнләй чепуха.

Һуғыш осорон иҫләп, ҡыйын саҡтарын да ҡыҙыҡ итеп һөйләй торғайны олатаһы. "Иҫемдә, аслыҡҡа түҙмәй, көн дә өләсәйемдәргә йүгереп барам. Улар ҙа юҡлыҡта, тик өләсәйем үҙ ауыҙынан өҙөп булһа ла бер-ике ҡалаҡ ойотҡан ҡойоп бирә лә, шунан, Ситдиҡ туйҙыңмы, тип һорай. Һикенән ҡуҙғалмай ғына, тағы бер-ике ҡалаҡ булһа, туйырмын, тим. Тағы ҡойоп бирә лә, туйҙыңмы тиһә, сеүәтәм менән ҡалағымды ялаһам, туйырмын, ти торғайным. Ана шулай ҡалаҡ ялап та туйған саҡтар бар ине", - тип ошо хәлде бер ләззәт менән йыш иҫенә алыр ине олатаһы. Өләсәһенең йомартлығын, әллә үҙенең шаян бала сағын, әллә һикелә ялтырап ҡалған ҡалағын, әллә башҡаһын һағыныуы булдымы икән ҡарттың.

Әле бына нисә йыл эшһеҙ йөрөгән Фәнил берәй көн ас ултырғаны, йә бер-ике ҡалаҡ ҡатыҡҡа зар-интизар булғаны бармы? Зар-интизарлығы бер шешә сәмәйҙә генә булмаһа. Ә өҫтәлдәрендә һәр саҡ һый, икмәк, картуф, ит, төрлө ярма, ҡайнатма, бал һәм башҡаһы. Эй, заман ауыр, тип зарланған булабыҙ. Әлбиттә, юлға сығырға, тәмәке-фәлән алырға, гәзит-журналға яҙылырға аҡса таба алмаған саҡтар ҙа була. Ә уныһы аслыҡ эргәһендә нимә - пүстәк барыһы ла. Кәйефе шәп ине Фәнилдең. Һөйөнөп йәшәргә кәрәк тормошҡа. Берәй нәмә уйлап табырға ҡөҙрәт тә, форсат та булыр әле. Ошоноһ-онан ғына ҡотолайым да.

Полиция бүлегенә алып килделәр. Килгәс, тағы һорау алдылар. Ағас ҡырҡыуҙы тағы дөрөҫләттеләр. Тағы ҡултамға ҡуйҙырҙылар. Тағы, штрафты ҡасан түләйһең, тип бауырға төштөләр. Ҡурҡытыуҙары ине, түләмәҫ был, тигәндәрҙер. Кискә сығарҙылар.

- Был ваҡытта ҡайҙа барайым мин, - тип аптырап ҡараны майорға Фәнил.

- Нимә, барыр кешең дә юҡмы ни? Эй, ошо урман аборигендарын.

- Юҡ, автобус китте.

Аптыраманылар. "Әгәр риза булһаң", - тинеләр ҙә, алты урынлыҡ буш ҡараңғы изоляторға алып барып яптылар."Алдан өйрәнә тор, кәрәк булыуы бар", - тип тә көлдөләр. Мунса төннөгөндәй генә тәҙрәгә ҡарап оҙаҡ ултырҙы егет. Ҡыҙыҡ был тормош, кисә генә бер ни булмағандай үҙ урманында ҡоштар моңон тыңлап, оҙон көйҙәр һуҙып йөрө лә, бөгөн килеп мөгәрәптә һыҙғырып ултыр инде. Эй, үҙгәреүсән дә инде был әҙәм тигәндәренең ғүмер итмеше. Көнө көнгә оҡшаш булмаһын әле тип Хоҙайҙың шулай "биҙәк" һалыуылыр. Иртәгә ирекккә сыҡһа, тағы бер сағыу бите тормоштоң. Фәнилдең барыбер ҙә кәйефе күтәренке ине.

Ишек янындағы иң ситке тимер карауатта урын алды. "Тиҙерәк сығып китергә ошо миңә тамамыраҡ булыр. Ысын енәйәтселәр түргә уҙһын." Ятҡас та йоҡлап китте. Тыныс йоҡланы, таңға олатаһын төштә күрҙе.

Ситдиҡ ҡарттың гәзит, китап уҡырға ике ҡолағы ла юҡҡа сыҡҡан күҙлеге бар ине. Чеховтың пенснеһы кеүек. Ана шул күҙлекте йәтеш кенә күҙе тапҡырында танауына эләктергән дә, балта менән ҡалын бер бүрәнәне әрсепме, юныпмы маташа. "Нишләйһең, олатай?" - тип һораны Фәнил. Ул үҙе - ҡорт ҡараған кейемендә, башында - селтәрле ҡалпағы.

- Ожмахҡа инер өсөн таяҡ кәрәк икән дә. Сатанлап һикереп барып булмай, ней ҡәбергә таяҡты һалмағанһың. Бына һин ҡырҡҡан ҡарағастан таяҡ эшләп ултырам, - эй асыҡ ишетелде олатаһының әйткәне.

- Бик йыуан түгелме һуң бүрәнәң?

- Таяҡҡа әйләндергәнсе тағы бер ғүмер кәрәк булыр инде, - тип көлдө олатаһы, шунан йәшәреп китте лә Фәнилдең үҙенә оҡшаны ла ҡуйҙы. Шул Фәнилгә оҡшаған олатай йылмайҙы ла китеп барҙы. Ҡулында таяҡ бар ине.

Бар төшө шул. Уянғас, төшөн иҫләп ята бирҙе ул. "Киткәндә таяғы бар ине. Тимәк, ожмахҡа барып етер. Ә ул таяҡты Шамил менән теге ваҡыт һатып эскән булһаҡ... барып етә алмаҫ инеме икән? Ҡыҙыҡ был донъя. Бүрәнәне таяҡҡа әйләндерер өсөн бер ғүмер кәрәк тағы, тине. Уныһы нимә аңлата? Ә таяҡты бүрәнә итеп буламы? Әл дә таяғы музейҙа һаҡлана. Барыһын да яҡшыға юрайым, төшөмдө изгегә юрайым, юрайым". "Изгегә юрайым", - тип шыбырҙаны.

Аяғын олатаһы Фәнилдең күҙ алдында һындырҙы. Ул саҡта малай ғына ине ул. Икеһе Йәнекәй артындағы ҡорт баҡсаһына солоҡ элергә барғайнылар. Бейек ҡарағастың тармаҡлы ботағына солоҡ умартаһын ултыртып бәйләп бөткәс, ни ғәләмәт, билендә нығытылған арҡанынан ысҡынып ҡолап килде лә төштө ҡарт. Фәнил уның ботаҡтан ысҡынып киткәнен дә, осоп килгәнен дә күрҙе, тик бер ни эшләй алманы. Доң итеп уның алдына, ярай ҙа аяғы менән, килеп төштө лә, ауып та китте. Оҙаҡ ыңғырашып ятты. Фәнил олатаһының башына тәгәрләп киткән түбәтәйен кейҙереп, тубыҡланып маңлайына усын ҡуйып торҙо. Һыҙлаһа ла түҙҙе, баланы ҡурҡытыуҙан ҡурҡты. Хәҙер торам, атты яҡыныраҡ алып кил, тигән булды тешен ҡыҫып. Малай тыңлашманы, уның ҡытыршы битен һыйпап ултыра бирҙе: "Тик үлеп китмә, олатай, йәме. Хәҙер алып киләм, тик үлеп китмә, йәме". Уның тамған күҙ йәштәре ҡарттың сыйылған битен әсеттерҙе.

Салбар балағын күтәргәс, тырпайып торған һөйәкте күреп Ситдиҡтың үҙенең дә күҙ алдары ҡараңғыланып китте. Атҡа тиклем Фәнил бәһлеүән олатаһын һөйрәп алып барып еткерә алмаясағын шунда уҡ аңланы. Ат арба менән был шырлыҡҡа үтә алмағас, олатаһы өйрәтеүе буйынса, тәүҙә ҡарама ботаҡтарынан һаласа эшләне, шуның өҫтөнә кожанканы түшәне лә иләп кенә ҡартты уның өҫтөнә әйләндереп һалды. Һөйрәп ҡараны, юҡ, ҡуҙғатып та булмай. Нишләргә? Атты туғарып килтерергә була ла, һуңынан ҡамыттағы сөйөлдөрөк бауын бәйләргә көс етерме һуң? Башҡа әмәл булмағас, атты туғарып олатаһы эргәһенә алып килде. Малай һаласаны арҡанлап, ҡамытҡа бәйләгәс, атты ҡыуҙы. Уныһы арбаға саҡлы хужаһын һөйрәтеп алып барҙы. Арбаға ҡарт ҡулы менән тартылып көскә-көскә менеп ятты. Һәр хәрәкәт һайын ыңғырашты. Себен-серәкәйгә былай ҙа тик тормаған бейәне тәртә араһына көскә индерҙе Фәнил. Ни тиклем көсәнһә лә сөйөлдөрөк бауын еренәсә тартып килтерә алманы, шунан түмәр килтереп, шуға аяғын терәп баҫып тартҡас, ҡамыт урынына килде. Ой, шатланды ун бер йәшлек Фәнил шул саҡта. Ҡамытты тартып бәйләрлек көсөң бар икән, тимәк, һин егет тигән һүҙ - шулай тип әйтә торғайнылар ауылда. Һыбай сабыу, ат аҫтынан сығыу кеүек оҫталыҡҡа улар мәктәпкә бармаҫ борон уҡ өйрәнәләр. Егет ҡорона инеү берсә ҡыуандырһа, берсә олатаһының ҡазаһы хәүефкә һалды малайҙы, әй, юҡ, егетте.

Олатаһын ҡырынайтып, ауыҙына көрөшкә менән һыу һалғас, яйлап ҡына ҡайтырға сыҡтылар.

Шунда олатаһы ҡарлыҡҡан тауыш менән:

- Мин үлгәс, улым, ҡәбер бурама ҡарағастың һылыуын киҫмә, ҡытыршы, йәмһеҙен киҫ, йәме, - тине.

- Нишләп йәмһеҙен? - тип һораны малай.

- Үткән ғүмеремде самалайым да, шул тамам булыр миңә, артыҡ һылыу батшаларға килешә, беҙгә, ер кешеһенә сайырлы, ҡытыршы, күпте күргән ҡарағас тейешле, - тигәйне.

- Мин һиңә барыбер ҙә һылыуҙы киҫәсәкмен, - тине егет Фәнил.

- Иң мөһиме мәғрүр булһын. Олатаң быға торошло.

- Һәм һылыу!

- Олатайҙы тыңларға кәрәк. Әле ул бура булып ауыр ҡарағас быуынын да нығытмаған. Йәшәйһе лә әле йәшәйһе.

Аяҡ оҙаҡ төҙәлмәне, улай ғына түгел, һынған урын эренләп серей башланы. Тубыҡтан аҫҡы яҡты ҡырҡырға тура килде. Һуңынан уны тимер аяҡ алыштырҙы. Был ҡазанан һуң олатаһы егерме йыллап йәшәне. Ышанырлы, ятҡан ейәне лә ҙурайҙы, эсеп, олатаһына ят бер йәнгә әйләнеп тә өлгөрҙө. Тик барыбер ейәненә булған ышанысын юғалтманы олатаһы. Үлер алдынан әсәһенә, ҡарағасты тик Фәнил генә ҡырҡһын, ул беләсе, тип юҡҡа әйтмәгәндер. Әллә һуңынан ошондай тарих булырын белдеме икән? Был малай, бәлки, тәүбәгә килер, тип өмөтләнгәндер. Бынау эшһеҙлек тамам кешелектән сығарҙы. Олатаһының күҙенә ҡарарға оялып, янына ла бармай торғайны шул Фәнил. Әллә олатаһын тыңламай, һылыуыраҡ ҡарағасты ҡырҡтымы икән? Эйе шул, хаҡы буйынса алтынға бәрәбәре эләккән олатай мәйеленә.

Шуныһы ҡыҙыҡ, шул йылды баяғы тармаҡлы ҡарағастағы солоҡтан ғүмерҙә булмағанса бик күп бал алдылар. Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң икән. Тик бал һылап ҡына аяҡты төҙәтеп булмай, Ситдиҡ ҡарт ғүмерлеккә сатан булып ҡалды. Һәм әле лә шул ағасҡа солоҡ ҡуймай ҡалғандары юҡ. Их, быйыл ғына, эсеп йөрөп эленмәй ҡалды. Ҡайтҡас, һуң булырмы?

Таң алдынан берәүҙе индерҙеләр. Ниндәйҙер кибеткә төшкәнендә тотҡандар үҙен. Йоҡлағанға һалышып ятҡан Фәнил һөйләшеүҙәренән шулайыраҡ аңланы. Тик кенә ятыуын белде. "Кемдә кемдең ни эше бар? Хәҙер сыға ла ҡайтып китә ул. Ә ана бур ултырһын, әйҙә. Был мөгәрәптә хужа булып".

Тик уйлағанса булманы. "Буласаҡ хужа", тиреһенә һыйыша алмай аҡырынып, ҡаҡырынып, изолятор буйлап йөрөнө. Фәнилдең өҫтөндәге аҡ сепрәкте һыпырып алып ташланы. Урман егете түҙҙе, арҡаһын ҡуйып ятыуын белде. Шул саҡ теге хайуан уның артына килтереп типкәс, Фәнил әкрен генә тороп ултырҙы. Шунан башҡортсалап тыныс ҡына:

- Нимә кәрәк? - тип башын күтәрҙе. Ярым ҡараңғы мөгәрәптә бурҙың мәғәнәһеҙ күҙ ҡарашын тойоп, асыуы ҡабара барғанын тойҙо. Тағы бер тапҡыр: - Нимә кәрәк? - тип ҡабатланы.

- Тәмәке килтер, живо, башкиренек! - тип аҡырҙы бур.

- Мин тартмайым, - яңынан һуҙылып ятты.

Теге маймыл Фәнилдең аяғына килтереп типте:

- Мин әйткәнде аңламаныңмы әллә, тупой башҡорт, тәмәке килтер.

Шома дуҫы һөйләгән шиғыр шылт ҡына хәтеренә төштө: "Батшаларға башын эймәгәнде, башҡаларға башҡорт баш эймәҫ".

Түҙмәне Федя. Һикереп тороп, тегенең эйәге аҫтына берҙе тондорҙо. Башҡортто кәмһеткән герой бер-ике метрға осоп барып төштө лә тын ҡалды. Көс бар икән үҙендә. Күптән был йоҙроҡто эшкә еккән булмағас... Ҡысытып торған кеүек ине шул. Бур оҙаҡ ҡына хәрәкәтһеҙ ятҡас, Фәнилде ҡурҡыу алды, эй, эй, һин тереме, тип тегенең маңлайын тотоп ҡараны, муйынындағы ҡалын ҡан тамырын һәрмәгәс, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә пульсы бар икәнен шәйләне.

Уңарса булмай, шарт-шорт килеп ишек асылды ла өс-дүрт полиция хеҙмәткәре йүгереп килеп инде. Камера аша барыһын да күҙәтеп ултырғандар.

- Нимә булды бында? - тип аҡырҙы берәүһе.

- Ана... йығылды, - тип әйтергә лә өлгөрмәне, Фәнилдең эсенә икенсеһе килтереп тә типте. Бер-ике тапҡыр дубинка ла эләкте. Иҫенә килә алмаған бурҙың өҫтөнә һыу һиптеләр. Теге әҙерәк ыңғырашҡас, күтәреп койкаға һалдылар. Аҡ халат кейгән шәфҡәт туташы, бурҙың күҙҙәрен астырып, йөрәген тикшереп ҡараны ла, йыбанып ҡына, яңағы һынған, дауаханаға алып барырға кәрәк, тине.

- Эшең хөрт, урман айыуы, - тип ыржайҙы бер сержант Фәнилгә.

- Айыу имеш, торғаны менән аборигендар. Майор дөрөҫ әйтә, ул аборигендарҙы ауылдары менән юҡ итергә кәрәк. Үҙ законадары, имеш, - икенсеһе егеттең башына тондорҙо.

- Мин бер ни эшләмәнем. Ул йәбеште, мин һаҡландым, - Ташлыйылға бәһлеүәне башын ҡаплап бөгәрләнеп ятты. Эштең ҙурға китеүен һиҙҙе. Хәҙер ултыртасаҡтар, мотлаҡ ултыртасаҡтар.

Бына һиңә "иртәгә ирек". Юҡ, Хоҙай башҡасараҡ биҙәк ҡуйған икән был көнгә. Хулиганлыҡ өсөн 15 тәүлек сәпәнеләр егеткә. Быныһын да Фәнил көләмһөрәп ҡабул итте. Килгән ҡазаны тулыһынса татымайса, сығып булмайҙыр инде яҙмыш сөңгөлдәренән.

**(Дауамы бар).**

***✓ Ҡурҡыу кешенең ярты ғүмерен ала, тиҙәр. Алалыр. Күберәген алмаһа әле. Ҡурҡыуҙың баҫымы ни тиклем көслө булһа, шәхес шул тиклем тарҡалыуға дусар. Шул уҡ ваҡытта ҡурҡыу күп осраҡта ыңғай һөҙөмтә лә бирә.***



ТӘҮБӘ



# ҠОТОЛАЙЫҠ...

## иблис ҡотҡоһонан

### Беренсе һабаҡ: ояла белеүем ояттан һаҡланы

Оят тигән төшөнсә бер ниндәй закондарҙа ла, әхлаҡи ҡағиҙәләрҙә лә юҡ. Ә кәрәк ине! Ҡыйғыпыр араһында соҡсонған асарбаҡтар ана шул "кешенән оят" тигән планканан түбән төшкән әҙәмдәрҙер. Оялмайҙар икән, тимәк, кеше ҡиәфәтендәге хайуанға әйләнгәндәр. "Соҡсоноусылар"ҙың тағы бер төрө бар. Улары - рөхсәтһеҙ инергә ярамаған күңелдәрҙә ҡазыныусылар. Бындайҙары, тәүгеләренән айырмалы рәүештә, икеләтә, өсләтә гонаһлы.

Беҙҙең халыҡта "оят була" тип тәрбиәләү бар. Күп кенә әҙәм балаларының оҙайлы йылдар һуҙымында эсеп йөрөүе ана шул тәрбиәнең онотола барыуынан да киләләр.

### Икенсе һабаҡ - ҡурҡыу

Эйе, был тойғо булмаһа, эсеүҙе, ғөмүмән, ташлау мөмкин дә түгелдер. Ҡурҡыу тойғоһо һәр кешелә бар. Үҙебеҙҙә лә йыш ҡурҡыталар. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы эсеү-тартыуҙың зыяны менән ҡурҡыта. Тик ул күмәртәләп ҡурҡытыуҙың файҙаһы ғына юҡ. Коммунистик идеология осоронда шул идеологияға тура килмәүҙән ҡурҡтыҡ. Дөрөҫөрәге, ҡурҡыттылар. Коммунистар партия сафынан сығарыуҙан ҡурҡты. Партияға күп осраҡта көсләп индерҙеләр, кире сығарабыҙ, тип ҡурҡыттылар. Хәҙер генә мәҙәк һымаҡ. Ә ваҡытында ул идеология, йәғни театрлаштырылған тамаша бик уңышлы эшләне. Диндарҙар, дин ҡанундарын теүәл тотмағандар, хатта атеист булып ҡыланғандар ҙа, Хоҙай алдында гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡты.

Ҡурҡыу кешенең ярты ғүмерен ала, тиҙәр. Алалыр. Күберәген алмаһа әле. Ҡурҡыуҙың баҫымы ни тиклем көслө булһа, шәхес шул тиклем тарҡалыуға дусар. Шул уҡ ваҡытта ҡурҡыу күп осраҡта ыңғай һөҙөмтә лә бирә. Әле мин ана шул ҡурҡыу тураһында һөйләмәксемен.

Бер Америка яҙыусыһының хикәйәһен уҡығайным. Авторҙың да, хикәйәнең дә исемен онотҡанмын. Сюжеты ябай ғына. Ике дуҫ осраша. Ҡул биреп һаулыҡ һорашалар. Төп герой дуҫына сигарет тәҡдим итә. Тегеһе хәҙер инде бер нисә йыл тартмауын әйтә һәм, ташларға теләгең булһа, тип, дуҫына тәмәке тартыуҙы ташлатыусы бер фирманың адресын бирә. Күпме генә маташһа ла, тартыуын ташлай алмаған дуҫы был фирма менән ныҡ ҡыҙыҡһына һәм адресы буйынса эҙләп таба. Уны яҡшы итеп ҡаршы алалар. Килешеү төҙөйҙәр, аҡса түләтәләр. Иң ҡыҙығы шул: килешеүҙә ғәҙәти булмаған пункттар була. Йәғни, "әгәр ҙә тәмәке тартыуҙы ташларға теләүсе шул килешеү шарттарын боҙһа, физик һәм психологик язалауға дусар ителергә тейеш".

Төп герой Америка кешеһе бит инде. Беҙҙеңсә әйткәндә, "крутой", үҙ илендә үҙен ирекле тойған демократ, бөтөн нәмәгә төкөрөп ҡарап өйрәнгән ковбой тоҡомо. Башта ул был фирманың эшенә төкөрөп ҡарай. Ҡыҙғаныска ҡаршы, фирма клиентына ҡарата алған бөтөн вәғәҙәләрен дә үтәй башлай. Башта тәмәке тартҡаны өсөн урамда туҡмап китәләр. Икенсе туҡмаҡ йәшеренеп тартҡаны өсөн эләгә. Өсөнсө юлы балаһын урлайҙар һәм ҡабат тартмаҫҡа ант иттергәс кенә ҡайтарып бирәләр. Быныһы психологик һөжүм була инде. Һаман да ташлай алмай был тәмәкеһен. Артабан тағы бер эләктерәләр һәм уң ҡулының урта бармағын киҫәләр, башҡа бармаҡтарын да киҫеү менән янайҙар. Бары ошонан һуң ғына был меҫкендә ҡурҡыу тойғоһо уяна һәм ул тартыуын ташлай. Дуҫын осратып, ҡулын ҡыҫа. Рәхмәт йөҙөнән. Тик шул саҡта ғына уның да урта бармағы булмағанын һиҙеп ҡала.

Ябай ғына фантастик сюжет. Ләкин был хикәйәгә ҙур мәғәнә һалынған. Беҙҙә Абдуллалағы Шәмсиә әбей ҙә ҡурҡытты. Бының өсөн һүҙҙәрен йәлләмәне, дәлилдәр ҙә килтерҙе. Иң ҡурҡытҡаны - янынан эсә башлағандарҙы фалиж һуғыу (паралич) булғандыр.

Әбейҙән сыҡҡас, вокзалға төшкән юлда бер ир менән һөйләшеп барҙыҡ. Ул Бөрө районынан килгәйне. Башта ул билдәле психотерапевт Трускаловта дауаланған. Ике бажа шулай яңы тормош башлағандар. Ләкин өс айҙан бажалар Бөрө ҡалаһында осрашҡан һәм, оҙаҡ уйлап тормай, осрашыуҙы ихлас "йыуған".

- Был юлы Шәмсиә әбейгә килергә булдым, - ти ул, - бажа Абдуллаға килеп ҡайтҡандан һуң эсеүен саҡ ташланы. Беләһеңме, беҙҙә эшләгән бер ир ошонан ҡайтҡас, янынан эскәйне, фалиж һуҡты, әле йөрөй ҙә алмай.

- Шуны белә-күрә тороп килдеңме? - тип һорайым үҙенән.

- Киләһең инде, башҡа сара юҡ. Алла бойорһа, ҡабат эсмәҫмен ул, - тип ышаныслы әйтеп ҡуйҙы.

Собханалла, шулай була күрһен. Уның ҡурҡыуы миңә лә күскәндәй булды. Ни тиһәң дә, үҙ ҡолағың менән тере шаһиттан ишеткән ғибрәт бит!

### Өсөнсө һабаҡ - йоҡо тәмен яңынан татыу

Белмәйем, күңел тынысландымы, башҡа сәбәптәнме, хәҙер тыныс йоҡлайым. Ҡыҫҡаһы, йоҡо тәмен яңынан татыным.

Австрия психологы Зигмунд Фрейд йоҡоға бик ҡыҙыҡлы аңлатма бирә. Уныңса, йоҡлаған ваҡытта кеше үҙен әсә ҡарынындағы кеүек хис итә. "Мин йоҡлаған саҡта үҙемде уратып алған донъя хаҡында онотам һәм уға ҡыҙыҡһыныуым да юҡҡа сыға. Йоҡлар алдынан мин донъяға шулай өндәшәм: "Мине борсома, мин һинән арыным, йоҡом килә". Сабый бала, киреһенсә: "Минең йоҡом килмәй, әле арымаһым..." - тип ҡаршылаша. Шулай итеп, йоҡоноң биологик маҡсаты - ял, психологик сифаты - донъяға ҡыҙыҡһыныуҙың юҡҡа сығыуы. Беҙ үҙебеҙ теләмәй килгән донъянан арыйбыҙ. Шуға күрә донъяға тыуғанға тиклемге хәлгә, йәғни әсә ҡарынындағы кисерешкә ваҡыты-ваҡыты менән ҡайтып торабыҙ. Беҙ хатта әсә ҡарынындағы кеүек йыйылып, ҡараңғы һәм бер кем дә борсомаған мөхит тыуҙырырға тырышабыҙ..."

Ҡыҙыҡ аңлатма, эйе бит? Бөгөнгө ғилми әҙәбиәттә быға ҡаршы сығыусылар күп. Шулай ҙа...

Эскән кеше лә иллюзиялар донъяһында йәшәй, наркоман кеүек ләззәт кисерә. Бала кеүек, ул да йоҡларға ашыҡмай. Иллюзияларҙан туймаған әле ул. Бик ныҡ арыған ҡына, һуты һығылған лимон хәленә ингәс кенә, ҡолай. Ул йоҡламай, ваҡытлыса һүнә. Был осраҡта йоҡо тураһында һүҙ алып барып булмай, әлбиттә.

**Мораҙым ӘХМӘТОВ.**

**(Дауамы. Башы 5-7-се һандарҙа).**

---

*ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ*

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*

### Эшһеҙ ауыл

Әҙәм балаһын өмөт йәшәтә, өмөт алға әйҙәй, ул юғары ынтылышҡа көндәлек эш һәм ныҡышмал хеҙмәт аша ғына өлгәшергә мөмкин. Бөгөн ауылдарҙа һәммәһен бер урынға туплаған, аҙыҡ-түлек, әпәкәй етештергән хеҙмәт юҡ. Хеҙмәт булмағас, яҡты, күңелдә елкендергән өмөт тә юҡ, ә ул үҙ сиратында сараһыҙлыҡ килтерә. Сараһыҙлыҡтың асылы билдәле. Тағы шуны өҫтәп әйтәм, эшләүҙең ни икәнен дә онотҡан хәҙерге халыҡ юҡлыҡҡа риза булып тик ятырға өйрәнеп алды. Эшләргә теләмәй һәм - бөттө-китте! Ауылыма ҡайтһам, ауылдаштарымды клубҡа йыйып һөйләшеп алыуҙы ғәҙәт иткәнмен. Бер ҡайтҡанымда эшһеҙлек хаҡында һүҙ сыҡты.

- Тороп тороғоҙ әле, ағай-эне, - тинем, - һуң үҙегеҙ яңы ғына әйттегеҙ түгелме, бөгөнгө көндә көтөүсе булмағанлыҡтан, һыйыр көтөүе юҡ икән, һарыҡты ла сиратлап көтәһегеҙ, бына һин, ҡустым, - алғы рәттә ултырған иргә мөрәжәғәт иттем, - улың менән һарыҡ көтөүен ал да көт. Хаҡын да килеш, аҡсалары юҡтар менән итләтә, картуфлата һөйләш, ҡайһы берәүҙәре, моғайын да, бесәнләтә биреүҙән дә баш тартмаҫ.

- Юҡ инде, ағай, - тине теге ялҡау, - йәйге селләлә мейе ҡайнатып аңра һарыҡтар артынан эйәреп йөрөргә мине алйот тип беләһеңме әллә? Лутсы өйҙә ятам...

- Әле нисек көн итәһегеҙ һуң?

- Бисә эшләй бит, беҙгә шуныһы ла еткән!

Фридрих Энгельстың әйткәндәре менән килешәм - көндәлек хеҙмәт кенә кешене кеше итә. Эшһеҙҙең бер килеп маймыл хәленә ҡалыуы бар. Бына нимә һипһендерә!

### Әсәләр

Нахаҡҡа яла яҡтылар. Район үҙәгенән вәкил ебәрҙеләр, эшемде партия йыйылышына ҡуйҙылар. Иң аҙаҡтан сығыш яһаусыларға күскәс, беренсе булып һүҙҙе яҡын дуҫым, кәңәшсем иҫәпләнгән кеше алды ла ғәйепһеҙ икәнлегемде белә күрә күҙ ҙә йоммай: "Оҙаҡ эшләне. Етте. Ҡайһы берәүҙәрҙән етәксенең "еҫләнә" башлауы хаҡында ла ишеттем әле!" - тине. Ниндәй "еҫтер", уны мин дә, башҡалар ҙа төшөнөп етмәне, хәйер, тел бит һөйәкһеҙ, ҡайһы яҡҡа борһаң да бара, ошо урынһыҙ һәм мәғәнәһеҙ ҡулланған һүҙҙе үҙе аңланымы икән? Икеле. Райондан килгән вәкил дә мине башҡаларға һәр саҡ өлгө итеп ҡуя ине, был юлы инде икенсе хәбәрҙе һалды: "Ҡаты шелтә бирергә тәҡдим итәм, партия сафынан сығарһағыҙ ҙа ҡаршы түгелмен!" Бына бит нисек, аҡтын ҡараға әүерелеүе күҙ асып йомған ғына ара икән дә баһа. Йыйылыштан иң аҙаҡтан сыҡтым, шунан кабинетыма инеп, онотолоп ултырҙым бер килке. Ҡайтырға сыҡҡанда ошоғаса аяҙ күктә ҡара болот ҡаплап киткәйне. Юлымда тап булған бер нисәү күрмәмешкә һалышып, ситләп үттеләр. Ауылда бит хәбәр йәшен тиҙлегендә йөрөй, былар, моғайын да, эштән китеүем хаҡында ишетеп өлгөргәндәрҙер. Ҡайтып индем. Көтөп торғандар, өҫтәлдә самауыр борхоп пар бөркә, өйҙән йылы икмәк еҫе килә. Әсәйем ҡаршыма килеп, ҡулымды һәрмәп ҡыҫты ла күҙҙәремә төбәлде: "Һин ныҡ һәйбәт кешеһең, балам, эшлекләһең, ғәҙелһең, хеҫтәрлекле улһың, яҡшы атайһың. Беҙ һине ошолай фиғелдә белдек һәм беләбеҙ. Ә ҡалғаны ваҡ мәсьәлә!" Әсәйемдең әйткәндәрен ҡеүәтләргә теләгәндәй, офоҡта туҙғышҡан болоттар йыртығынан ҡояш ҡараны ла тәҙрә аша өйөбөҙҙө нурҙарға күмде.

Әсәләр һис ҡасан үҙгәрмәй, теләһә ниндәй шарттарҙа ла беҙ уларға һәр саҡ бала, саф күңелле бала булып ҡалабыҙ, һәм һуңғыһы, улар янда булғанда ғына беҙ яҡлаулы һәм һаҡлаулыбыҙ.

*✓ Бер көндө Йомаш ауылына ҡуйы йәшел төҫтәге "Мерседес" килеп инә. Ишегенән шат йылмайған Әхтәм күренә. Шулай итеп, ул сит ил маркалы дизель автомобилен һатып алып, туғандарын, ауылдаштарын шаҡ ҡатыра.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТАНЫП ТОР

■ Андерсон исемендәге Онкология үҙәге хеҙмәткәрҙәре тәмле-татлы ятатыу менән яман шеш үҫеше бәйле, тип белдерә. Һынауҙар ҡомаҡтарҙа үткәрелгән. Уларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр. Тәүге төркөмгә көнбайыш илдәрендә йәшәүселәрҙең рационындағы күләмгә тиң шәкәр бирелгән. Икенсе төркөмгә шәкәр бирмәгәндәр. Эксперимент барышында тәүге төркөмдә яман шеш тиҙ үҫешкән. Юғары фруктозалы кукуруз сиробы менән шәкәр ашау һөҙөмтәһендә үпкәләргә метастазалар таралған. Һығымта шундай: шәкәр генә түгел, кукуруз сиробы ла зыянлы. Бындай сиропты беҙ ашамайбыҙ, тип тынысланмағыҙ, ул кәнфиттәрҙә, желела, һуттарҙа, йогурттарҙа булыуы бар. Шуға ла тәм-томдан тулыһынса баш тартығыҙ, тип кәңәш итә ғалимдар. Шәкәрҙе емешләк һәм бал менән алыштырығыҙ.

■ Лондрина университеты ғалимдары үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, мүк еләге һуты быуындары һыҙлаған ҡатынҡыҙҙарға шифалы. Ревматоидлы артрит менән сирләүселәргә көнөнә ярты литр мүк еләге һуты эсергә кәңәш ителә. Өс ай буйына эскәндән һуң быуындарҙы зарарлаусы антиесемдәр күләмен кәметергә мөмкин. Һуҙ anti-CCP антиесемдәре турaһында бара. Уларҙы гиперактив иммун системаһы етештерә. Тап ошо антиесемдәр күләменә ҡарап, табиптар артрит тураһында дагноз ҡуя. Эксперимент күрһәтеүенсә, мүк еләген гел эсеү артриттың билдәләрен - аяҡ-ҡулдарҙың быуындары шешен кәметә. Мүк еләгендәге антиоксиданттар был билдәләрҙе булдырыусы аутоиммун реакцияһын йәлата.

■ Статистика буйынса, һуңғы осорҙа йөрәк сирҙәре үлем сәбәпсеһе булып тора. Бигерәк тә 60 йәште үткәндәр, диабет менән ауырыусылар, һимеҙлек менән яфаланыусылар хәүеф төркөмөндә. Шуға ла тәүге билдәләргә иғтибар итеп өйрәнергә кәрәк. Уларҙың иң беренсеһе - күкрәк ҡыҫыуы, сәнсеүе, шулай уҡ һул ҡул ауыртыуы. Былар инфаркттың классик билдәләре. Шулай ҙа күптәр иғтибар итеп бармаған нәмәләр ҙә бар, мәҫәлән, алһыу йәки төҫһеҙ лайлалы йүтәл. Был иһә йөрәк етешмәүсәнлеге, үпкәләрҙән шыйыҡлыҡты сығарыу насарланыуы тураһында һөйләй. Баш әйләнеүе, тын ҡыҫылыу - былар барыһы ла йөрәктең тейешле кимәлдә эшләмәүе һөҙөмтәһе. Ағза үҙ бурыстарын теүәл үтәмәй, туҡымалар кислород етешмәүҙән зыян күрә башлай. Аяҡтар шешә икән, был да йөрәктең дөрөҫ эшләмәүе билдәһе.

■ Түлһеҙлек - хәҙерге замандың төп бәләләренең береһе. Ғалимдарҙың яңы асышы күрһәтеүенсә, беҙҙе уратып алған замана уңайлыҡтары ла бының сәбәбе булып тора ала. Пластик һәм винил составындағы фталат уларҙы һығылмалы, йомшаҡ итә, оҙаҡ ҡулланыу мөмкинлеге бирә. Улар аҙыҡ-түлек ҡаптарында, иҙәнгә түшәй торған материалдарҙа, медицина ҡорамалдарында, косметикала бар. Ғалимдар эксперимент барышында инә ҡомаҡтарға көүҙәнең һәр килограмына ҡарап 20 микрограмдан 200 миллилитрға тиклем фталат биргән. Өс ай барған һынауҙарҙан һуң иң аҙ күләмдә фталат алған инә ҡомаҡ та нәҫел дауам итеүсе булыуҙан туҡтаған. Фталаттар гормональ тайпылыштарҙан тыш, тотош репродуктив система эшмәкәрлеген юҡҡа сығара алыуы ихтимал, тигән фекерҙә ғалимдар.

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# АУЫЛДЫҢ ИҢ КӘРӘКЛЕ КЕШЕҺЕ

**Был тормошта кемгәләр кәрәк булып йәшәү иң ҙур бәхеттәрҙең береһелер ул. Р.Ғарипов әйтмешләй, "Кеше кешеләргә кәрәк булһын, бер ҡайҙа ла артыҡ булмаһын!" Мин һеҙгә тап ошондай ауылдашыбыҙ тураһында һөйләмәксемен.**



## Ҡыҙыҡһыныусан бала

Баймаҡ районы Йомаш ауылының иң кәрәкле кешеһе ул Әхтәм Зәйнулла улы Ҡәйепов. Алты балалы Ҡәйеповтар ғаиләһенең төпсөгө булһа ла, бик иркәләнергә форсат булмай уға. Малтыуар, ҡош-корт, умартасылыҡ, йәнә йыл да ҡабатланып килгән утын, бесән эштәрендә бала саҡтан өйрәнеп үҫә. Төрлө техниканы һүтеп-йыйыу менән ҡыҙыҡһыныуы шунан башлана: ул саҡтарҙа (үткән быуаттың 70-се йылдары) балалар почта аша төрлө ҡыҙыҡлы уйындар, открыткалар аҙҙырып ала торғайны. Бер посылка менән үҙең йыйып-ҡороп ала торған радиоалғыстың кескәй генә деталдәре килә. Кескәй Әхтәмдең шатлығы күккә аша. Ул ваҡытта ҙур, ысын радиоалғыстар ҙа була, әлбиттә. Әммә быны үҙ ҡулдарың менән йыйған радио әллә ҡайҙағы тауышты ишеттерһен әле! Ҙур тырышлыҡ менән кескәй бармаҡтар эшкә тотона һәм берике көн тигәндә радио телгә килә.

- Шул кескәй генә радионы ҡолағына ҡуйып, һикергеләп йөрөгәнен иҫләйем әле лә, - тип хәтерләй Әхтәмдең бала сағын бер туған апаһы, шағирә Лилиә Ҡәйепова. - Тағы ла шул хәтеремдә: атайым Силәбенән беҙҙең икебеҙгә лә уйынсыҡтар алып ҡайтты: миңә "мама" тип ҡысҡыра торған ҡурсаҡ, ә ҡустыма - аҫҡысын борһаң, елеп китә торған тимер машина. Бер-ике көндән, машинаның нимә йөрөтә икән, тип, Әхтәм уны һүтеп ташланы. Ҡустым ҡуйманы, минең ҡурсағымдың да эсен асып ҡараны. Шулай итеп, икебеҙ ҙә уйынсыҡһыҙ ҡалдыҡ. Бына шулай ҡыҙыҡһыныусан булып үҫеүе уны һәр ваҡыт ижади фекерләүгә этәргәндер, тием...

Әхтәм Ҡәйепов Йомаш урта мәктәбен тик "5" билдәләренә генә тамамлай һәм бер ҡаршылыҡһыҙ Башҡорт дәүләт аграр университетының агрономия факультетына уҡырға инеп, "һыу менән һуғарыу белгесе" һөнәрен алып сыға. Ул осорҙа дәүләт программаһы буйынса илебеҙгә "мелиорация" белгестәре күп кәрәк була. Әммә ул уҡып бөтөүгә, илдәге етәкселек тә, тимәк, сәйәсәт тә үҙгәрә. Әхтәм гөрләп торған ҙур "Һаҡмар" колхозында инженер булып эш биографияһын башлай.

## "Мерседес" алып ҡайтты

Хәҙер генә ул "сит илгә сығыу" менән бер кемде лә аптыратып булмай. Ә совет осоронда закондар ҡаты ине. Сит илгә бик һайлап ҡына сығарҙылар. Шулай итеп был бәхет Әхтәмгә лә эләгә. Комсомолдың өлкә комитеты ауыл хужалығының йәш белгестәрен махсус йүнәлтмә менән Германия Федератив Республикаһына (ГДР) ебәрә. Ауылдашыбыҙ Германияла һарыҡ көтөүсе фермерҙа ярты йыл буйына эшләп, тәжрибә туплай. Телде, урындағы ғөрөф-ғәҙәттәрҙе өйрәнә. Иң ҡыҙығы шул: хатта алыҫ көнбайыш илендә лә Әхтәмдең "алтын ҡуллы" механик икәненә тиҙ төшөнәләр. Хужаһы төрлө йыланмаларҙы, йәки машиналарҙы ҡараштырырға гел Әхтәмде алып йөрөр булып китә. Күрше-тирәнән дә мөрәжәғәт итә башлайҙар уға. Ҡайтыр ваҡыты еткәс, хужаһы уны бында ҡалырға өгөтләй башлай. Әммә Әхтәм ризалашмай. "Тик миңә Германияла эшләнгән яҡшы енел машина һайлашырға булышығыҙ!"- тип үтенә Әхтәм хужаһынан.

Бер көндө Йомаш ауылына ҡуйы йәшел төҫтәге "Мерседес" килеп инә. Ишегенән шат йылмайған Әхтәм күренә. Шулай итеп, ул сит ил маркалы дизель автомобилен һатып алып, туғандарын, ауылдаштарын шаҡ ҡатыра. "Ә нисек ҡурҡманың? Берәйһе туҡтатып, машинанды тартып алып, үҙеңде йәйәү сығарып ебәрһә, йәки үлтерһә?" - тип аптырағандар ауылдаштарына ул: "Ә мин төндә генә килдем. Көндөҙ берәй урманға инеп йоҡлайым да, кис китәм. Сөнки төндә бер кемгә лә туҡтамаҫҡа мөмкин", - тип яуаплай. Енел машиналар менән ҡыҙыҡһыныуын туҡтатмай ул. Хатта Рязань ҡалаһынан да үҙенә машина ҡыуып алып ҡайта.Һәр бер "тимер ат"ын, ҡулы белгәс, үҙенә нисек ҡулай, шулай йәйлаштырып та ала.

## Бар эшкә маһир

Үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, күп кешеләр эшһеҙ ҡалғас та, Әхтәм ҡул ҡаушырып ултырмай. Атаһы - Зәйнулла Шәрифулла улы Ҡәйепов - ауылдың ғына түгел, район кимәлендә танылған скрипкасы була. Шул моңдарҙы тыңлап үҫкән малайға музыка ене ҡағылмай ҡалмай. Әхтәм гармунда уйнай, йырлай, ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнарға ла өйрәнә һәм төрлө байрамдарҙа ҡатнаша башлай.

- Бала ваҡыттан бирле бик яҡын күрәм Әхтәм дуҫымды, - ти ауылдашы, күршеһе, яҙыусы Нияз Алсынбаев. - Һаман хәтеремдә: ул бер заман бик оҫта итеп ағастан ҡылыстар яһай башланы. Беҙ, малайҙар, ҡыҙыҡып киттек. Үҙебеҙ эшләп ҡарайбыҙ, уныҡы кеүек матур килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Шунан беҙ бернисә тин биреп, йә башҡа берәй ҡыҙыҡ әйбергә алыштырып, унан ҡылыстар яһатып алдыҡ та, бергәләп "һуғыш" уйыны уйнай инек. Шул саҡта уҡ Әхтәм дуҫымдың күңелендә бөгөн маҡталған "эшҡыуарлыҡ" ҡомары йәшәгән икән, тием хәҙер...

Һуңғы йылдарҙа Әхтәм компьютерҙар төҙәтеү эше менән мауығып китә. Компьютер нескәлектәре бихисап. Шул нескәлектәргә өйрәнеү өсөн Әхтәм ҡалын-ҡалын китаптар йә дисктар, төрлө программалар яҙылған йәйланмалар һатып ала. Белем генә дөрөҫ һөҙөмтә килтерә. Быны яҡшы аңлай Әхтәм. Ауылда махсус мәктәптәр ҙә, курстар ҙа юҡ. Баймаҡ, йә Сибайға барып уҡыр ине, ҡартайған әсәһенең янынан китергә теләмәй. Шуға Әхтәмгә үҙаллы өйрәнергә тура килә. Бик тырыша торғас, 2-3 йылда ярайһы уҡ оҫтаға әүерелә һәм ауылдаштарының һорауы буйынса өйҙән-өйгә йөрөп, компьютер көйләй башлай.

## Оҫта ҡәҙере алтынға тиң

Борон башҡортта йола ҡанундары ҡаты булған - кемдеңдер оҫта икәнен белеп ҡалһалар, уны нисек тә ҡәҙерләргә, сирләмәһен тип, нығыраҡ тәрбиәләргә тырышып йәшәгәндәр. Оҫталарҙың ҡәҙере алтынға тиң булған. Мәҫәлән, өй бурағанда, бәлки, оҫта ауыр бүрәнә лә күтәрмәҫ, йышҡы, бысҡы ла тотмаҫ, әммә уның ҡәҙере - "бына ошо бүрәнәне шунда ҡуй ҙа, бына ошо тәңгәлдән бысырға кәрәк" тип әйтә белеүендә булған. Бөгөнгө көндә әлеге шул компьютер оҫталарының эше лә кемгәләр еңел һымаҡ тойолор, әммә оҫтаның уның шулай "ярты сәғәт" кенә экранға теклəп, төрлө төймәләргә белеп баҫыу өсөн бер-нисә йыл ялһыҙ ултырыуы, белем туплауы бик ҡиммәт тора!

- Шәхсән үҙем мәҙәниәт хеҙмәткәре буларaҡ, уның хеҙмәт юлын яҡшы беләм. Мәҙәниәт йорто эшләп торғанда уны һәр ваҡыт концерт-байрамдарҙа музыка уйнатыу, башҡа ойоштороу эштәренә йәлеп итә торғайнылар. Ауылдағы ниндәй сара булһа ла, береһе лә Әхтәмһеҙ үтмәй әле лә. Ул - универсаль музыкант та. Кәрәк булһа, ҡурайҙа, гармунда уйнай, синтезаторҙа, ҡумыҙҙа, гитарала уйнап та һөйөндөрә. Хәҙерге көндә музыкаль аппаратура менән ауылға ғына түгел, хатта күрше ауылдарға ла ярҙам итә. Телевизор, компьютер, телефон һәм башҡа аппаратураларҙы, шулай уҡ техниканы йүнәтеүгә саҡырып ҡына торалар. Саҡырыуын була, ул ваҡыт табып килеп тә етә. Уның шундай юғары профессиональ белеме менән юғарыраҡ урлөргә лә мөмкинлеге булды. Әммә ул ауылды, мәҙәниәтте яратып, ауыл халҡын ихтирам итеп, атай нигеҙен һаҡлап, ауылда ҡалды. Иң кәрәкле кешебеҙ ул беҙҙең, - ти оҙаҡ йылдар ауыл мәҙәниәт йортонын художество етәксеһе, китапханасыһы булып эшләгән хаҡлы ялдағы ауылдашы Роза Асман ҡыҙы Саникина. Бөгөнгө көндә китапханасы булып эшләгән Әлфиә Баймурзина өсөн дә Әхтәм - ҙур таяныс һәм терәк. "Мине иң ныҡ һоҡландырғаны - уның зыялылығы, тәрбиәлеге һәм олоһона ла, кеҫеһенә лә оло ихтирам менән ҡарауы. Бөгөнгө көндә лә ул ауыл советы, китапхана ойошторған сараларҙа алыштырғыһыҙ ярҙамсы",- ти Әлфиә.

**К. ЗӘЙНУЛЛИНА.**
**Баймаҡ районы.**

✓ *Бына ошондай үҙенсәлектәргә эйә ала ҡарға. Эйе, аҡыл йәһәтенән башҡа ҡоштарҙан күпкә айырыла ул. Әммә беҙ, нишләптер, "йөрөй шунда ала ҡарға һымаҡ" сағыштырыуын маҡтау һымаҡ ҡабул итмәйбеҙ.*



*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

# ҠАРА ҺАҒЫҘ

**Һағыҙәвей була торғайны беҙҙең ауылда. Исемен дә белмәйбеҙ, үҙен, нишләптер, инәй ҙә тимәнек, ә әбей тип йөрөттөк. Контора ҡаршыһындағы бәләкәй генә аҡ йортта йәшәне ул. Уның һағыҙ ҡайнатҡанын беҙ уның өй тапҡырынан сыҡҡан нәҙек кенә аҡһыл төтөндән белә торғайныҡ. Контора ҡаршыһында төтөн сыҡтымы - ҡартәсәйҙе етәкләп китәбеҙ һағыҙ алырға. Яңғыҙ ғына йәшәгән әбейҙең бер яратҡан шөғөлө булғандыр инде. Бәлки, һағыҙ ҡайнатып, балаларҙы йәлеп итеп, үҙенең яңғыҙлығын да баҫҡандыр. Һәр хәлдә, яраттыҡ ул инәйҙе...**

Ҡара һағыҙҙы бына шул замандан сәйнәгәнем дә юҡ ине. Районның Хоҙайбирҙин ауылына эш менән барғанда Миңзәлә апай Күсәрбаеваларға инеп сыҡтыҡ. Бәхтиһәң, уның улы Айбулат ҡайын туҙынан һағыҙ ҡайнатыу эшенә тотонған икән. Халыҡ кәсептәренең береһен тергеҙә башлаған егет әлеге көндә төрлө милли күргәҙмәләрҙә лә, байрамдарҙа ла әүҙем ҡатнаша. Ул ҡайнатҡан һағыҙҙы ауыл халҡы ла, юлаусылар ҙа ярата ала. Миңзәлә апай ҙа, хаҡлы ялда булһа ла, тик ятмай. Әсәһенән, өләсәһенән ҡалған төрлө боронғо көнкүреш әйберҙәрен бөгөнгәсә һаҡлап килеп, үҙенсәлекле йорт музейы булдырған. Юлаусылар һағыҙ алырға ғына түгел, оҙон юлдарҙан тән яҙырға, ял итеп алырға ла туҡтала. Балалар төрлө әйберҙәр менән иҫтәлеккә фотоға төшөп, милли кейемдәрҙе кейеп ҡарап, уйнап кинәнә. Башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен сағылдырған ябай ғаилә музейы менән һағыҙ һатып алырға ингән һәр кемде ихлас таныштырып, мауыҡтырғыс итеп һөйләй Миңзәлә апай. Ә Айбулат беҙгә һағыҙ ҡайнатыу серҙәрен асты.

- Суйын сөгөнгә туҙҙы таҙалап, йоҡа ғына итеп йыртҡылап һалабыҙ. Йәбешмәһен өсөн һауытты алдан майлап ҡуйһаң да була. Сөгөндө һауа үтмәҫлек итеп баҫтырып япмаһаң, туҙ ялҡынланып яна ла китә. Иплән кенә асып, туҙҙы өҫтәй-өҫтәй тораһың, таҙа таяҡса менән ара-тирә болғатаһың. Таяҡ шыма, йышылған, таҙартылған булырға тейеш. Юғиһә, һағыҙға ҡый йәбешә һәм уның сифаты булмай. Һағыҙ массаһы барлыҡҡа килгәс, һыуыҡ һыу ҡойоп, әҙерәк ултыртып ҡуябыҙ ҙа, һыуынғас, ҡырып, йомарлап алабыҙ. Әҙер һағыҙҙы өлөштәргә бүлеп, махсус полиэтилен ҡапсыҡтарға һалып, һатыуға әҙерләйбеҙ, - ти егет. - Туҙҙы пилорамаға килтерелгән ҡайындан һыҙырып алам. Таҡта үткәрер алдынан уны барыбер һыҙыралар, ҡый булып ятып ҡала ҡайсаҡ. Шуға мин матур ерҙәрен ҡарап ҡына, һайлап алам. Һағыҙға тигән туҙ ап-аҡ ҡына булырға тейеш. Юлаҡланып, ҡарайып торғандары бармай, - тип тәфсирләп һөйләй Айбулат.

Медицина раҫлауынса, ҡара һағыҙ теште лә таҙарта, теш ҡаҙналарын нығыта, ауыҙҙағы насар еҫте бөтөрә, боғаҡ ауырыуын (зоб), үҙәк көйөүен дауалай, ашҡаҙан эшмәкәрлеген көйләй, аппетитты аса. Шуға ла уны ашау яғына насарыраҡ балаларға ла бирергә кәңәш ителә. Әллә ниндәй ҡатнашмалар ҡушылған сит ил һағыҙҙарын сәйнәп, теште, ашҡаҙанды ғына түгел, тотош организмды ҡаҡшатҡансы, әлбиттә, экологик таҙа һағыҙға өҫтөнлөк биреүең мең артыҡ.

**Айгөл АЙЫТҠОЛОВА.**

*ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ*

**Күптән түгел миңә ошондай шылтыратыу булды: "Әле бына аптырап, ала ҡарғаларға ҡарап торам. Ошоға хәтлем мин уларҙы ҡыш көнө ауылда бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ ине. Ә бына бөгөн уңлап ала ҡарға ауыл эргәһендәге ҡыйлыҡта сүпләнеп йөрөй. Ошоно белергә ине - улар беҙҙә ҡышлаймы, әллә ҡышын йылы яҡҡа осоп китәләрме?"**

# АЛА ҠАРҒА

Фән теле менән әйткәндә, ала ҡарға синантроп төр ҡошона инә. Синантроп һүҙенең мәғәнәһе "кеше менән бергә" тигәнде аңлата. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, синантроп ҡоштар кеше йәшәгән төбәкте ташлап китмәҫкә, кеше менән бергә йәшәргә тырыша. Бик ҡаты һыуыҡтар мәлендә генә йылы яҡҡараҡ күсеп тороуҙары бар. Үҙ сиратында синантроп ҡоштар ауылдыҡы һәм ҡаланыҡы була. Бына, әйтәйек, ауыл халҡы йыл әйләнәһенә һайыҫҡандың тегеләй-былай ялпылдап осоп йөрөүенә күнегеп бөткән. Ә бына ала ҡарға ауыл тирәһендә йәшәргә тырышмай, ул ҡала ҡошо булып иҫәпләнә. Был ҡош менән беҙ ошондай әйтем аша таныш: "Йөрөй шунда ала ҡарға һымаҡ". Беҙ, нишләптер, башҡаларҙан ниմәһе менәндер айырылып торғандарҙы, ала ҡарға, тип атайбыҙ. Минең уйымса, ала ҡарға башҡа ҡоштарҙан ысынлап та айырылып торалыр, шуға күрә беҙ уны сағыштырыу миҫалы итеп алғанбыҙҙыр. Ошо турала һөйләшеп алайыҡ әле.

Баштан уҡ шуны әйтергә кәрәк, ала ҡарға тән-кәүҙә матурлығы менән маҡтана алмай. Суҡышы ҡара, башы ҡара, ҡойроҡ-ҡанаттары ҡара-күк, арҡаһы һәм ҡорһағы бысраҡ аҡ төҫтә. Аяҡтары ла ҡара, етмәһә, улары нәҙек һәм оҙон. Буйһын матурлығы юҡ был ҡошта. Ә бына атлауы матур. Ул ерҙә аяҡтарҙы кирә баҫып ғорур атлап йөрөй. Ҡурҡыныс янау менән ғорур атлау онотола, ул һикерә-һикерә ышаныслы араға ҡасыу яғын ҡарай. Шунан тағы китә күкрәктәрҙе киреп ғорур атлап. Матурлыҡ артыҡ бирелмәгәнгә күрә, аҡыл шәп бирелгән уға. Башҡа ҡоштар ҙа алйот түгел, уларға ла аҡыл бирелгән. Әммә ала ҡарғаға күберәк бирелгән, буғай. Шуларҙың бер нисәһен һанап китәйек әле.

Башҡаларҙан айырмалы рәүештә, ала ҡарғалар үҙ-ара "һөйләшеп" аңлаша, тип иҫәпләй ҡош белгестәре. Бәхтиһәң, уларҙа телмәр апаруҡ үҫешкән икән. Сағыштырыу өсөн ошондай һандар килтерәйек. Әгәр тауыҡ 13 төрлө, әтәс 15 төрлө, ҡарабаш турғай 40 төрлө, сәүкә 120 төрлө тауыш сығарһа, ала ҡарға 300-гә яҡын төрлө тауыш сығара! Ғаилә башлығы үҙ яртыһы менән матур итеп һөйләшә белә. Шул уҡ ваҡытта үҫмерҙәргә тормош ғиләһен өйрәткән мәлдә тауыш күпкә ҡатыланып китә. Талашыу мәлендә эш ҡысҡырыуға хәтлем барып етә. Ысынмылыр-бушмылыр, хатта һөйләшеү айырмалары бар был ҡоштарҙа. Әгәр берәй ала ҡарға йомошо төшөп, сит ҡалаға барып сыҡһа, ул урындағы "милләттәштәренең" телен аңлай алмай бер була икән!

Ала ҡарғалар һанауға ла шәп икән. Ҡош белгестәре ошондай һынау үткәргән. Улар бер сеүәтәгә 8 (йәки 12, йәки 15), ә икенсеһенә 9 (йәки 13, йәки 16) ҡуңыҙ һалғандар һәм ала ҡарғаға тәҡдим иткәндәр. Аптырамалы инде, ала ҡарға һәр ваҡыт күберәк ҡуңыҙ һалынған сеүәтәне һайлап алған. Ҡыҙыҡ өсөн ала ҡарға менән кеше ярышып ҡарарға булған. Иҫ китмәле, кеше берҙе лә еңә алмаған! Ул ҡуңғыҙҙарҙы бармаҡ төртөп һанаған арала ала ҡарға мул сеүәтәне эләктереп тә өлгөргән!

Күмәкләшеп уйнап алырға ла ярата икән ала ҡарғалар. Әйтәйек, берәүһе суҡышы менән берәй ташты эләктереп ала һәм һауаға атыла. Һауала ул ташты суҡыштан ысҡындырып ебәрә. Төшөп барған ташты икенсеһе эләктереп ала һәм күпмелер өҫкә күтәрелгәс, ташты тағы төшөрөп ебәрә. Иң отҡоро ташты тағы эләктереп өлгөрә. Был уйын таш ергә төшкәнсе дауам итә.

Шуныһы иҫ китмәле, ала ҡарғалар мәрхүм булып ҡалған "ҡорҙашына" бағышлап "аят" үткәрәләр икән. Үлгән ала ҡарғаны күреп ҡалыу менән тәү күргәне һөрән һала, был саҡырыуға башҡалары йыйыла һала. Йыйылған ала ҡарғалар сама менән ун биш минут туҡтауһыҙ ҡарҡылдап, мәрхүм тирәһендә өйөрөләләр. Шунан ҡысҡырыуҙы ҡапыл туҡтаталар һәм ағас ботағына, ташҡа, ергә ултырып, бер аҙға өнһөҙ ҡалалар. Ошолай тын ҡалып, улар үлгән иптәше менән хушлашалар. Мәрхүмде ошолай һуңғы юлға оҙатҡас, шым ғына таралышалар. Был хәлде ҡош белгестәре һаман аңлата алмай.

Бына ошондай үҙенсәлектәргә эйә ала ҡарға. Эйе, аҡыл йәһәтенән башҡа ҡоштарҙан күпкә айырыла ул. Әммә беҙ, нишләптер, "йөрөй шунда ала ҡарға һымаҡ" сағыштырыуын маҡтау һымаҡ ҡабул итмәйбеҙ.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**



*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Әйткәндәй, бары тик беҙҙең һәм бер нисә артта ҡалған илдә генә ҡарт көнөндә кеше бәхетһеҙ һәм ауырыу булырға тейеш, тигән ҡараш йәшәй. Алдынғы илдәрҙә хатта олоғайғас та кеше тормошҡа ҡыуанып йәшәргә һәм сәләмәт булырға тейеш, тип иҫәпләйҙәр. Һәр хәлдә, ошоға ынтылалар. Әгәр Европаның оло йәштәге кешеләренә ҡараһағыҙ, уларҙы ҡарт тип әйтергә телегеҙ ҙә әйләнмәҫ - әүҙем тормош менән йәшәйҙәр, үҙҙәренә шөғөл табалар, үҙ-үҙҙәрен тәрбиәләйҙәр, сәләмәтлектәрен күҙәтеп торалар, йәштәрен бар ти тә белмәйҙәр.

## Күҙҙәрҙең ҡоросон ҡайтарабыҙ

Күҙҙәребеҙ ауырта һәм тала икән, беҙ: "Күҙҙәр хәрәкәтләнһә генә күрә", - тигән төп ҡанунды боҙабыҙ. Тәбиғәт күҙҙәрҙе тап беҙ уның менән ҡулланһын өсөн уйлап тапҡан. Көсөргәнеше булмаған ағзалар тәү сиратта зыян күрә. Мәҫәлән, ултырып эшләгән йәштәрҙә олоғайғас, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре барлыҡҡа килә. Тәбиғәт кешегә кәрәкмәгән ағзаны һис йәлләүһеҙ үҙенә ала.

- Ҡасандыр кешенең хайуандарҙыҡы кеүек үк еҫ тойоуы, күҙ осҡорлоғо һәм ишетеүе көслө булған, - ти профессор, медицина фәндәре докторы, РФ Лазер фәндәре академияһы докторы Олег Панков. - Ә хәҙер был функциялар, уларҙы етерлек кимәлдә файҙаланмағанлыҡтан, күпселек осраҡта юғалтылған. Һуҡыр йәки һаңғырау хайуан тәбиғәттә бер көн дә йәшәй алмай. Ул ғына ла түгел, ул тулыһынса һуҡырайыуға ла барып етмәйәсәк. Ә йәмғиәттә кеше һиҙеү ағзалары тулыһынса юғалтылғанда ла йәшәргә һәләтле. Цивилизация һәм техник прогресс кеше физиологияһына ныҡ кире йоғонто яһай. Заманса техника кеше күҙе күрмәгәнде һәм кеше ҡолағы ишетмәгәнде "күрергә", "ишетергә" һәләтле. Һөҙөмтәлә тойоу ағзалары тулыһынса ҡулланылмай. Хәҙерге ваҡытта уларҙың мөмкинлектәре ниндәйҙер кимәлдә юғалтылған. Ә эшләмәгән ағза - эшлектән сыға. Был - тәбиғәттең бәхәсһеҙ ҡануны.

Шулай итеп, күҙҙең күреү һәләтен яҡшыртыр өсөн уның менән файҙаланырға кәрәк. "Нисек инде? - тип аптырарһығыҙ. - Ғәҙәти тормошта бит беҙ күҙҙәрҙе актив файҙаланабыҙ!" Ысынлап та шулай, замана кешеһе күҙҙәрен хатта бер минутҡа ла тынғыслыҡта ҡалдырмай. Күҙҙәр даими тонуста, даими күнекмә үтә кеүек. Шул уҡ ваҡытта донъяла күҙ ауырыуҙары ҙур тиҙлек менән үҫә. Һуңғы алты йылда ғына илебеҙҙә офтальмология сирҙәре менән ауырыусылар өс миллионға арта. Табиптар күреү ағзаһы сирҙәре эпидемияһы тураһында иҫкәртә. Ни өсөн шулай килеп сыға һуң?

Күҙҙәрҙе эш түгел, ә уларҙың дөрөҫ булмаған режимда эшләүе арыта. Беҙ, ғөмүмән, алыҫтағы предметтарға ҡарауҙы онотток. Күҙгә, ғәҙәттә, яҡындағы ваҡ предметтарҙы ҡарауҙан көсөргәнеш килә. Был, тәү сиратта, китаптағы йәки гәзиттәге ваҡ хәрефтәр, компьютер экранындағы ваҡ символдар. Был осраҡта күҙгә төшкән көсөргәнеш бер төрлө. Китап уҡығанда күҙҙәр бер төрлө хәрәкәт эшләй: һулдан - уңға, һулдан - уңға. Көн һайын, сәғәт һайын бер үк ғәмәл. Күнекмә маҡсатында бер үк хәрәкәтте сәғәттәр буйына ҡабатлаған балеринаны күҙ алдына килтерегеҙ. Бер үк па, һәм башҡа бер нәмә лә түгел. Һөҙөмтәлә, мускулдарҙың күп өлөшөнә тейешле көсөргәнеш булмағанлыҡтан, бейеү хәрәкәттәре тупаҫ һәм насар килеп сығасаҡ.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

✔ *Ағай булыр егеттең әйткән һүҙе им булыр, булыр-булмаҫ егеттең әйткән һүҙе ел булыр.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*АФАРИН!*

# СТӘРЛЕЛӘР КИЛӘ!

**Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе быйылғы ижади миҙгелдә сәхнәгә сыҡҡан премьераларын Өфө тамашасыһына ла күрһәтәсәк. Был турала театрҙың художество етәксеһе Айҙар Зарипов журналистар менән осрашыуҙа белдерҙе. Сарала шулай уҡ Стәрлетамаҡ филармонияһының художество етәксеһе Лира Фәйзуллина, режиссерҙар Айрат Абушахманов менән Зиннур Сөләймәнов ҡатнашты.**

Был юлы баш ҡаланың театр һөйөүселәре "Ашҡаҙар" (М. Буранғолов), "Бигылый" (С. Ильясов) спектаклдәрен ҡарай аласаҡ. Элекке һымаҡ, аҙнаға һуҙылған гастролдәр ойоштора алмаһа ла, театрҙың "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Бәләкәй ҡалалар театрҙары" федераль проекты сиктәрендә ҡуйылған сәхнә әҫәрҙәрен киң йәмәғәтселеккә сығара алыуы ла ҡыуаныс. Тап ошо проект һөҙөмтәһендә баш ҡаланан ситтә булған театрҙарға ижади уй-ниәттәрен тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирелгән.

Мөхәмәтша Буранғоловтың "Ашҡаҙар"ы башҡорт телендәге тәүге пьесаларҙың береһе, уны башҡорт драматургияһына башланғыс һалған әҫәр тип әйтеп була. "Теүәл 100 йыл элек, 1919 йылда, Стәрлетамаҡ ерендә башҡорт милли театры формалаша. Ошо ваҡиға ла беҙҙе был материалға тотонорға илһамландырҙы. Буранғоловтың шәхесе лә гел иғтибар үҙәгендә, республикала үткән йыл уның тыуыуына 130 йыл тулыу айҡанлы күп саралар үтте. Фольклорсы, халыҡ сәсәненең яҙмышы тураһында беҙ ҙә тамашасыға һөйләргә теләнек", - ти спектаклдең режиссеры Зиннур Сөләймәнов. Спектаклдә бер юлы автор яҙмышынан төрлө ваҡиғалар ҙа, "Ашҡаҙар" әҫәре лә үрелеп бара. Башҡорт романтик театрының матур бер өлгөһө булған был спектакль тик яҡшы тәьҫораттар ғына ҡалдыра. Унда барыбыҙға ла яҡшы таныш актерҙар - Рафиҡ Хәсәнов, Резеда Әмәкәсова, Марат Ғәзәйеров һ.б уйнай.

"Һуңғы осорҙа режиссерҙарҙың проза әҫәрҙәренә мөрәжәғәт итеүе драматургияла кәсле идеялы әҫәрҙәр булмауы менән бәйлеме?" тигән һорау ҙа яңғыраны осрашыуҙа. "Быны сәбәптәре күп. Әммә театр сикләнергә тейеш түгел. Шул уҡ Мостай Кәрим, Василий Шукшиндың әҫәрҙәре лә сәхнәгә проза аша сыға. Театрҙың ҡыҙыҡлы темалар эҙләүендә бер ниндәй ҙә хилафлыҡ юҡ", - тине режиссер Зиннур Сөләймәнов һәм Республика режиссура һәм драматургия үҙәге етәксеһе лә булараҡ, һуңғы 5 йылда драматургия үсеше йөнәтенән күп эштәр башҡарылыуын билдәләне. "Һәр дәүерҙә лә, яҡшы пьесалар аҙ, тигән фекер булған. Шуға режиссерҙарҙың, драма әҫәрҙәре етешмәй, тиеүенә ғәжәпләнергә кәрәкмәй. Мин, мәҫәлән, жанры буйынса бүлеп ҡарамайым, текст һине тетрәндерергә тейеш. Бөгөнгө заман пьесалары араһында ошондай тәьҫир көсөнә эйә булғанын һирәк осратам", - тип яуапланы режиссер Айрат Абушахманов. Ул Стәрлетамаҡ башҡорт театрында яҙыусы Спартак Ильясовтың романы буйынса "Бигылый" спектаклен сәхнәләштергәйне. "Бигылый" - булған ваҡиғаға нигеҙләнгән. Үткән быуаттың 80-се йылдарында Учалы урмандарында Икенсе Бөйөк Ватан һуғышы мәленән ҡасып йөрөгән кеше табыла. "Ул герой булып, һуғыштан һуң байрамдарҙа осрашыуҙарға ла йөрөй алыр ине. Тик яҙмыш уны шундай хәлгә ҡуя - ул тотҡонлоҡҡа эләгә", тип режиссер билдәләүенсә, һалдаттың трагик тормошо, уның эске кисерештәре бөгөнгө тамашасы өсөн лә фәһемле буласаҡ.

Был гастролдәрҙә иһә Стәрлетамаҡ филармонияһының "Урал легендалары" мюзиклы асасаҡ. Ғөмүмән, һуңғы 5 йылда филармония гастролдәр менән Өфөгә килгәне юҡ ине. Мюзикл шихандарға бәйле халыҡ легендаларына нигеҙләнгән. "Унда яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ көрәше генә түгел, тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау, экология темаһы сағыла", - тине филармонияның художество етәксеһе Лира Фәйзуллина. Көйҙө композитор Урал Иҙелбаев яҙған.

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

# КҮРГӘҘМӘБЕҘ - ГЕРМАНИЯЛА

**Германияның билдәле туристик үҙәктәренең береһендә - Гейдельберг ҡалаһында Башҡортостан оҫталарының күргәҙмәһе асылды. Ул "Башҡортостандың халыҡ туҡымалары" тип атала. Макс Бергтың текстиль музейында был күргәҙмә 3 ай барасаҡ.**

Сараны асыу тантанаһында Майндағы Франкфурт ҡалаһындағы Рәсәй Федерацияһы Генераль консуллығы вице-консулы Динар Әхмәтғәлиев сәләмләне. Башҡортостандың рәсми делегацияһы ла ҡатнашты. БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡованың сәләм хатын Республика халыҡ ижады үҙәге генераль директоры Артур Әлибәков уҡып ишеттерҙе. "Бөгөнгө сара - хеҙмәткә, сәнғәткә, ижадҡа уртаҡ ҡарашлы, әммә икеһе ике төрлө булған мәҙәниәттәр араһына күпер һуҙа. Башҡортостан Республикаһы VI Бөтөн донъя фольклориадаһына әҙерләнә һәм башҡа мәҙәниәттәр менән ҡыҙыҡһыныу беҙҙең өсөн айырыуса мөһим", - тиелә унда. Артур Айҙар улы был күргәҙмәне ойоштороуҙа ярҙам күрһәткәндәре өсөн Купфальц музейы директоры доктор Фредер Хепп, Макс Бергтың текстиль музейы директоры доктор Кристин Шерер, яҡташыбыҙ Динара Даниэлға рәхмәт белдерҙе.

"Башҡортостандың халыҡ туҡымалары" проекты республика Башлығы грантына үткәрелә. Башҡорт халҡының бай мәҙәниәтен сағылдыра был күргәҙмә. "Надежда" ҡорама халыҡ клубы, Балаҡатай районының "Тамбур" халыҡ клубы, шулай уҡ профессиональ һәм үҙешмәкәр биҙәүгәмәли сәнғәте оҫталары эштәре, Республика халыҡ ижады үҙәге төрлө йылдарҙа ойошторған "Урал" халыҡ сәнғәте галереяһы проекттары тамашасы иғтибарына тәҡдим ителә. Күргәҙмәне ҡарау 20 майға тиклем дауам итәсәк. Ошо өс ай эсендә башҡорт сәнғәте өлгөләре менән донъяның төрлө илдәренән килгән меңәрләгән кеше таныша аласаҡ. Ойоштороусылары - БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, "Урал" Халыҡ сәнғәте галереяһы.




*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БЕРҘЕҢ КӨНӨ ИЛ МЕНӘН,

## илдең көнө ер менән

Ағай булыр егеттең әйткән һүҙе им булыр, булыр-булмаҫ егеттең әйткән һүҙе ел булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Миңә шул ҡәҙәре күп эш башҡарырға кәрәк, шуға ла мин киттем йоҡларға.

**(Роберт Бенчли).**

Дуҫтарыңды һаҡлап ҡалырға теләһәң, улар менән көрешмәҫкә тырыш.

**(Тристан Бернар).**

Гел еңергә һәм оторға теләһәң, үҙеңдең уйыныңды уйлап сығар ҙа ҡанундарын бер кемгә лә әйтмә.

**(Эшли Брильянт).**

Ғәйбәтте тутыйғош кеүек ҡабатлама. Үҙеңдән дә берәй нәмә өҫтәп ебәр.

**(Веслав Брудзиньский).**

Кешене уның дуҫтарына ҡарап хөкөм итмәгеҙ. Иуданың да дуҫтары бик яҡшы булған.

**(Поль Валери).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Кеше бер ваҡыт ҡошсоҡ тотоп алған.**

**- Ирекһеҙлектә кәрәгем булмаясаҡ минең, - тигән ҡошсоҡ, - ебәрһәң, һиңә өс файҙалы кәңәш бирергә ант итәм.**

**Беренсе кәңәште ҡошсоҡ Кеше ҡулында булғанда, икенсеһен - ботаҡҡа ҡунғанда, өсөнсөһөн - ҡалҡыулыҡтың иң бейек нөктәһендә ишеттерергә һүҙ биргән. Кеше риза булған һәм тәүге кәңәшен һораған.**

**- Әгәр ҙә һин хатта ғүмереңдәй ҡәҙерләгән нимәнелер юғалтһаң, уның хаҡында үкенмә.**

**Кеше ҡошсоҡто ебәргән, ә ҡошсоҡ, ботаҡҡа ҡунып, икенсе кәңәшен биргән:**

**- Бер ҡасан да ысынбарлыҡҡа тура килмәгән, уйлап сығарылған хәбәрҙәргә ышанма.**

**Был һүҙәрҙән һуң ул ҡалҡыулыҡҡа осоп килеп:**

**- Эй, бәхетһеҙ! Мин ике ҙур бриллиант йоттом. Әгәр мине үлтерһәң, улар һинеке булыр ине, - тигән.**

**Кеше, асыуланып, башына тотонған. Аҙаҡ бер аҙ тынысланып:**

**- Өсөнсө кәңәшеңде булһа ла бир, - тигән.**

**- Ахмаҡ һин! - тип ҡысҡырған ҡошсоҡ. - Тәүге ике кәңәш тураһында уйлап та төрмай, өсөнсөһөн һорайһың! Мин һиңә нимә тинем? Юғалтыуҙар хаҡында үкенмә, уйлап сығарылған хәбәрҙәргә ышанма, тинем. Ә һин тап киреһенсә эшләнең. Уйлап ҡара, минең кеүек кескәй ҡошсоҡ эсенә нисек ике ҙур бриллиант һыйһын? Һин алйот, шуға ла ябай кешеләр өсөн тәғәйенләнгән сиктәрҙә ҡалырға тейешһең!"**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан нәшриәте" дәүләт унитар предприятиеһы типографияһында баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13)

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 1 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4077
Заказ - 169